*Күктәрҙең ҡөҙрәте алмашынып тороусан була. Ул бер әйелтә, бер кире турайта, турайта һәм кире әйелтә. Ул геройҙар менән уйнай, баһадирҙарҙы теҙләндерә. Намыҫлы ир-егет хатта бындай ауырлыҡтарға ла буйһона һәм яҙмыш кирелектәренә әҙер булып, тыныс ҡына йәшәй бирә. Бына шуның өсөн дә Күктәр уға бер насарлыҡ та ҡыла алмай.*

*(Конфуций).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№30 (448)


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Атың арығансы... сабып ҡал



3

Йәштәргә ҡыуышта ла ожмах, әммә фатирҙа яҡшыраҡ...



4-5

Донъя кешеһе, тыныслыҡ кешеһе, төрки халыҡтары йәшәгән төбәктәрҙең үҙ кешеһе



8-9

Ысын мөхәббәт бар бит ул...



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өлкәндәр йәштәрҙе әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләүҙе дауам итә, ә йәштәр өлкәндәрҙең әхлаҡһыҙлыҡ өлгөһө булыуын раҫлай...

***Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА, журналист, Бөрйән районы:*** Ҡәтғи рәүештә бөтә кешене лә әхлаҡһыҙ тип әйтергә ярамай. Һауыттағы бер серек алма бөтәһен дә серетә, тигән кеүек, кеше ниңәлер аралағы бер тәртипһеҙ кеше ҡылығына ҡарап, дөйөмләштерә лә ҡуя. Ысынлап та, ҡайһы бер өлкәндәр йәштәрҙе һаман да әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләүен дауам итә, шулай ҙа мин бөгөнгө йәштәр күпкә аҡыллыраҡ, зиһенлерәк, аңлыраҡ, тип әйтер инем. Уларҙың күбеһе бөгөн аңлы рәүештә дингә килә, айыҡ йәшәү рәүешен һайлай, етмәһә, өлкәндәрҙе лә үҙҙәре артынан эйәрергә саҡыра. Бынан биш-алты йыл элек Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғол мәсетендә йома намаҙы уҡыр өсөн кеше тултыра алмай торғайнылар. Унда тик оло йәштәге инәйҙәр йөрөнө. Ә бөгөн йәп-йәш егет-ҡыҙҙар менән мәсет шығырым тула. Бына быйыл Айгүзәл ҡыҙым менән бергә уның курсташ ҡыҙҙары ла районыбыҙға практика үтергә килде. Шул ҡыҙҙарға ҡарап һоҡланып туя алманым: шул тиклем ярҙамсыл, тәртипле, итәғәтле үҙҙәре. Намаҙҙарын ҡалдырмай уҡыйҙар, оҙон итәктәрҙә йөрөйҙәр. Бына улар ҙа бөгөнгө йәштәр өлгөһө булып тора ла инде. Бөгөн ауылдарҙа ла, ҡалаларҙа ла матур-матур өйҙәр һалып, заманса йәшәргә тырышҡан йәштәр күп. Бөгөнгө көндә республикабыҙҙа эскеһеҙ туйҙар, байрамдар, саралар уҙғарылыуы ла нәҡ йәштәрҙең башланғысы бит. Шуға күрә йәштәр хатта ҡайһы бер яҡтан алдырып та ебәрә, тип әйтер инем.

Шулай уҡ бөгөн өйөрө менән эсеп йөрөгән йәштәр күренмәй, ә бына урта быуын кешеләре араһында йыйылышып байрам итеп алыу ғәҙәте, үкенескә күрә, һаман да бар. Шулай ҙа бөгөнгө йәштәрҙең барыбер ҙә өлкәндәрҙе тәртипһеҙ тип атарға хаҡы юҡ. Улар совет заманында тәрбиәләнгән, дин һәм иман төшөнсәләрен һанға һуҡмай үҫкән быуын. Балаларына ла шул уҡ тәрбиәне биргән. Заманды һүгергә ярамай, тип әйтәләр. Шундай заманда үҫкәнбеҙ, ни эшләйһең. Һәр замандың ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла бар. Беҙ әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләгән өлкәндәр араһында ла өлгө алырҙайҙары бихисап бит әле. Өлкән быуын тик эш менән мәшғүл булып, бөгөнгө көн менән йәшәһә, йәштәр үҙҙәренең әхирәт тормошон да ҡайғырта, донъя өсөн дә тырышып тора.

Бер-берендә әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләүгә килгәндә, халҡыбыҙ, атта ла, тәртәлә лә бар, тигән. Бындай күренештәр ике яҡта ла осрап ҡуя. Йәшлектең дә, ҡартлыҡтың да үҙ матурлығы, үҙ күркәмлеге. Бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалып булмай.

(Дауамы 2-се биттә).

ИЖАДХАНА

# БАШҠОРТ КИНОҺЫ "ЕҢМЕШ"...



## Францияның Канн ҡалаһында уҙғарылған кинофестивалдә ҡатнашты

**Кинематограф меңәр йыллыҡ тарихы булған музыка, һынлы сәнғәт, театр менән сағыштырғанда сәнғәттең яңы бер төрө һанала. Шулай ҙа был уға бер нисә тиҫтә йылдар буйы иң киң таралған сәнғәт төрө булып ҡалырға һис тә ҡамасауламай. Бөгөнгө көндә беҙҙең башҡорт киноһы ла яйлап үҫешә, донъя кимәленә сыға, милли колоритлы фильмдарыбыҙ халыҡ-ара фестивалдәрҙә призлы урындар яулай. Киләсәктә башҡорт киноһын үҫтереүгә тос өлөш индереүҙе үҙенең бурысы итеп алған, әле студент ҡына булыуына ҡарамаҫтан, бер нисә фильм да төшөрөп өлгөргән йәш режиссер Айнур АСҠАРОВ менән әңгәмәбеҙ уның үҙе һәм һөнәре тураһында барҙы. Һүҙҙе уға бирәйек:**

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *Эш бер-берендә әхлаҡһыҙлыкта ғәйепләүҙә түгел, ә үҙеңдең ниндәй кеше булыуыңды асыҡлауҙа, уйланыуҙа, һығымталар яһауҙа. Үҙ-үҙеңде тәрбиәләү менән шөғөлләнеп, тәүбәгә килеү бер ваҡытта ла һуң түгел.*



ИШАРА

# ТАРИХТАРҘЫ БОҘОП ЯҘЫП БУЛА...

## борғоланмай бары шәжәрә

**Әле бына Рауил Бикбаевтың "Хазина" поэмаһын яңынан уҡып ултырам. Унда әйтелгәндәргә ауаздаш башымда ҡайнаған уйҙарым да:**

Эй, был заман!
Хәләл закондарҙы
Харам яҡҡа бороп ебәрә.
Төп законды борғоларға була,
Тарихтарҙы боҙоп яҙып була,
Борғоланмай бары шәжәрә.

Бындай уйҙарға тормошобоҙҙағы көн дә күргән, ишеткән хәлдәр этәргес биреп тора шул. Тағы ла Рауил Бикбаев әйткәнсә:

Алмашынды һөрән-цитаталар
Алмашынған һайын юлбашсы...

Иҫемдә әле, совет иле тарҡалмаған саҡта Шаҡша биҫтәһендә урынлашҡан кирбес заводына барып, шамот балсығынан панно яһай инек. Цех мастеры Мәскәүҙә үткәрелгән съездан ҡайтты ла, беҙгә аптырап шуларҙы һөйләне: "М.Горбачевтың телмәрен тыңлағанда, һиҙәм, бер депутат та бер нәмә лә аңламай, оялып, аҫҡа ҡарап тик ултыра. Нимәне емерергә, нимәне үҙгәртергә, тигән һорау бирәләр бер-береһенә..."

Ысынлап та, бер кем бер нәмә аңламай ҡала шул заманалар алмашынған мәлдә. Депутаттар араһында бер көләмәс тә һөйләнде ул ваҡыт. Билмән фабрикаһына көтмәгәндә тикшереү комиссияһы килеп төшкән. Комиссия ағзалары продукцияны тотҡолап ҡарай ҙа: "Ә ниңә һеҙҙең билмәндәрегеҙ түңәрәк түгел, ә дүрткел?"- тип һорайҙар икән. Ҡаушап ҡалған фабрика етәксеһе: "Бәй, үҙгәртеп ҡороу дәүере бит", - тип аңлата. Күрәләр, һәр билмән тешләнеп сыҡҡан. "Ә ниңә билмәндәр тешләнгән?" - тип һорай комиссия ағзалары. "Госприемка бит", - тип яуап бирә етәксе. Комиссия ағзалары ла билмәнде тәмләп ҡарарға ниәтләнә, тик ауыҙҙарына ҡапҡан ризыҡты кире сығарырға мәжбүр булалар һәм: "Ә ниңә һеҙҙең билмәндәрегеҙ бешеп етмәгән?" - тигән һорау бирәләр. "Илдә лә ускорение, бында ла ускорение", - тип әйтеп ҡотола етәксе...

Бына шулай, бер нәмә лә аңламаған етәкселәр уйлап та тормай илде емерҙеләр, тарҡаттылар, хосусилаштырҙылар. Хәҙер килеп тағы ла изгерәк нәмәләребеҙгә - рухыбыҙға яҫҡыналар. Милләт сиктәрен юйыу тураһындағы ишаралауҙар ҙа ишетелеп-ишетелеп ҡала. Суверенитет һүҙен бөтә закондарҙан алып ташланылар, әле телмәрҙә федерализм һүҙен дә бик ишеттермәйҙәр. Хәҙер беҙҙең республикабыҙ ҙа "регион" йә "субьект" тип атала. Үҙәк һөйләгән телмәрҙәрҙе тыңлаһам, ҡолаҡтарым ҡыҙара минең. "Илем, халҡым, республикам", тип һүҙ һөйләп булмай, шунда уҡ "милләтсе" тигән мөһөр тағыла. Асыу килә. "Эйе, мин милләтсе!" тип яуап бирге килә лә тора. Милләтсе булыу минең аңымда үҙ милләтемде ысын йөрәктән яратыу, уның менән ғорурланыу, халҡымдың мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеү, үҙемдең, исмаһам, ете быуын нәҫел шәжәрәмде белеү кеүегерәк төшөнсәләргә ҡайтып ҡала. Мин балалар йортонда, хөкүмәт ҡурсыуында, төрлө милләт балаларынан торған берҙәм ғаиләлә тәрбиәләндем. Әммә бала саҡтан үҙ милләтемдең ҡыҙы булыуымды тойоп, тамырҙарымды иҫләп үҫтем. Ут күршем уҡытыусы Ғәлимә апай шәжәрәмде төҙөп бирҙе. Ибраһим олатайҙан таралған ете быуынымды белеп ҡыуандым. Ошондай милләтселектең ни насарлығы бар?

...Тағы ла Рауил Бикбаев һүҙҙәрен килтерәм:

Алмашынды һөрән-цитаталар
Алмашынған һайын юлбашсы...

Әле лә илдә барыһы ла яңыса үҙгәртелеп ҡоролған, түрәләрҙең алышынған йә алышынырға торған мәле. Ул үҙгәрештәрҙе нисек аңларға икән беҙгә, ябай халыҡҡа? Мәҫәлән, модернизация һүҙен нисек аңларға? Билмән кимәлендәме, әллә етештереүсе предприятиеларҙы яңы ҡорамалдар, станоктар менән йыһазландырыу, яңы эш урындары булдырыу, типме? Әллә тағы ла арттырыбыраҡ емереү-бутау, болғатыуҙар итепме? Уйланам...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Өлкәндәр йәштәрҙе әхлакһыҙлыкта ғәйепләүҙе дауам итә, ә йәштәр өлкәндәрҙең әхлакһыҙлык өлгөһө булыуын раҫлай...*

***Морат ЛОҠМАНОВ, тележурналист:*** Әҙәп-әхлаҡ темаһына килгәндә, беҙ иң беренсе динебеҙҙән дә сығып фекер йөрөтөргә тейешбеҙҙер. Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә: "Яҡшы ҡарттар булмаған ерҙә яҡшы йәштәр ҙә булмай",- тигән фекер әйтелә. Борон-борондан өлкәндәр тормош юлына яңы аяҡ баҫҡан, быуындары нығынып та бөтмәгән йәштәргә аҡыллы кәңәштәре менән ярҙам иткән, уларға өлгө булып йәшәгән. Элек йәштәр хатта ололарҙың кәңәшенән тыш, мөһим тип һаналһа ла, ниндәйҙер эште башҡарыуҙан тыйылып торған. Ололарҙың абруйы шул кимәлдә булған. Бөгөн, үкенескә күрә, беҙҙең борондан килгән ошо ҡағиҙәләребеҙ үтәлмәй, кәңәш, аҡыл бирерҙәй өлкәндәр ҙә һирәгерәк осрай. Шулай ҙа бер-беренә ғәйеп ташлап ҡына хәлде төҙәтеп булмай. Сөнки өлкән быуын менән йәштәрҙең әхлағының ниндәй булыуы бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. Уны төҙәтеү өсөн һәр кем, йәғни ололар ҙа, йәштәр ҙә үҙ өҫтөндә эшләргә тейеш. Әгәр йәштәр үҙҙәрен әҙәплерәк тота башлаһа, ололар ҙа уларға эйәрәсәк, ололар үҙҙәрен әҙәпле тотһа, йәштәр ҙә уларҙан өлгө аласаҡ. Ләкин йәштәргә бер ҡасан да ололарҙы әҙәпһеҙлектә ғәйепләргә ярамай. Беренсенән, уларға ҡарата насар мөнәсәбәт белдереү үҙе үк килешмәй. Икенсенән, улар алышыныуҙар заманында йәшәгән быуын, коммунизм, демократия шауҡымы ла өлкәндәрҙе рухһыҙлыҡҡа алып килеүгә сәбәп булғандыр. Шул уҡ ваҡытта йәштәрҙе әҙәпһеҙ тип әйтәбеҙ икән, беҙ, ололар, үҙебеҙгә генә ғәйеп ташлайбыҙ килеп сыға. Шуға күрә бер-беребеҙгә ғәйеп ташлауҙарҙы бөтөрәйек, юғиһә, ике яҡта ла кире күренештәр ҙә, ыңғай яҡтар ҙа бар. Иң яҡшыһы, әҙәпле, әхлаҡлы, инсафлы кешеләрҙән өлгө алыу, үҙеңә лә шундайҙар рәтендә булырға тырышыу, халыҡ араһында тәртип, иман булдырыуға үҙ көсөңдө индереү.

***Айгөл ЯУБАҪАРОВА, медицина хеҙмәткәре:*** Бөгөн ҡала ерҙәрендә уҡып, эшләп йөрөгән йәштәр үҙҙәре өлкәндәргә өлгө күрһәтеп, уларҙы үҙ артынан эйәртеп, матур, әҙәпле, әхлаҡлы йәшәргә өндәй. Шул уҡ ваҡытта ауылдарҙа эшләмәй, ата-әсә елкәһендә йәшәгән, эскелек менән мауығып, мәғәнәһеҙ тормош алып барған йәштәрҙе күреп, күңел төшә. Шундай уҡ ике яҡлы күренештәрҙе өлкән быуын вәкилдәре араһында ла күҙәтергә мөмкин. Тормошҡа йәм биреп, бына тигән итеп донъя көткән, башҡаларға өлгө булып йәшәгән өлкәндәрҙе күрһәң, шунда уҡ уларға эйәрге, улар кеүек үк бына тигән итеп йәшәге килә. Минеңсә, өлкәндәр ана шулай йәштәргә өлгө булып йәшәргә, ә йәштәр үҙ сиратында өлкәндәрҙең һүҙен тыңларға тейеш. Уйлап ҡараһаң, бөгөнгө көндә өлкәндәр "әхлаҡһыҙ" тип ғәйеп ташлаған йәштәргә бит ваҡытында аҡыллы кәңәш биргән, дөрөҫ юл күрһәткән, рухын нығытҡан өлкәндәр булмаған. Шуға күрә эш бер-берендә әхлаҡһыҙлыкта ғәйепләүҙә түгел, ә үҙеңдең ниндәй кеше булыуыңды асыҡлауҙа, уйланыуҙа, һығымталар яһауҙа. Үҙ-үҙеңде тәрбиәләү менән шөғөлләнеп, тәүбәгә килеү бер ваҡытта ла һуң түгел. Бер тапҡыр ғына бирелгән ғүмерҙе нисек итеп уҙғарырға һәр кем үҙе һайлай. Әхлаҡһыҙ кешенән ғибрәт алып, әхлаҡлынан өлгө алып йәшәргә кәрәк.

**Нәзирә АЙЫТОВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше?**

● Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

Икенсенән, теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү.

"Киске Өфө" аҙналыҡ баҫмаһы тап ошо бурысты йөкмәгән иненә. Әйҙәгеҙ, уны уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек.

● Әйткәндәй, кемдәр быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, һәр айҙың 17-һенә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитте киләһе айҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ. 31 августа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән (**50665** индекслыһына **340 һум 92 тин**, **50673** индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тин**) ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу башлана, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Июлдә гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләккә 5 **"Ҡөрьән-Кәрим"** һәм 20 **"Дини календарь"** (2012 йыл өсөн) әҙерләп ҡуйғанбыҙ.

● Кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Электрон почта: **info@kiskeufa.ru** Блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов һыу һәм газ ҡулланыуҙың иҫәп приборҙары ҡуйҙыртҡан граждандарҙың айырым категорияларына бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата компенсация өсөн 30 миллион һум аҡса бүлеү тураһында Хөкүмәт ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Сараны тормошҡа ашырыу өлкән йәштәге айырыуса мохтаж кешеләргә дәүләт ярҙамын көсәйтәсәк. Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы аҡсаны бүлеүсе итеп билдәләнгән.

✓БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығында "Башҡорт Уралы" биосфера резерватын булдырыу тураһында сираттағы комплекслы кәңәшмә үтте. Яңы биосфера резерватына айырыуса һаҡланыусы биш тәбиғәт биләмәһен - "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығын, "Мораҙым шарлауығы" тәбиғәт паркын, "Башҡортостан" милли паркын, "Ыҡ" зоология заказнигын, "Алтын солоҡ" тәбиғәт зоология заказнигын индереү ҡаралған. Әле "Башҡорт Уралы"на резерват статусын биреү өсөн ЮНЕСКО-ның Рәсәйҙәге комитетына ғариза әҙерләнгән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте менән "Разгуляй" компаниялар төркөмө араһында республиканың Бүздәк, Благовар, Шишмә райондары биләмәһендә малсылыҡ өлкәһендәге инвестиция проектын тормошҡа ашырыу буйынса хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Килешеү киләһе ике йылда Башҡортостан Республикаһында ит етештереү һәм эшкәртеү буйынса ҡеүәте йылына 70 мең тонна сусҡа ите етештереүгә иҫәпләнгән эре агросәнәғәт холдингы төҙөү буйынса инвестиция проектын тормошҡа ашырыуҙы күҙ уңында тота.

✓Баш ҡалала "Witzenmann" автокомпоненттар етештереүсе немец компанияһының яңы цехы сафҡа инде. "Витценманн-Руссия" йәмғиәтенең был заводы "ВАЗ", "Renault", "Ford", "Volkswagen", "Hyundai" һәм Рәсәй территорияһында йыйылған башҡа автомобилдәрҙең төтөн сығарыу системаһы компенсаторҙары өсөн экрандар һәм сильфондар етештерәсәк. Цех 100 кешене эш урындары менән тәьмин итәсәк.

✓Юғары уҡыу йорттарының ҡабул итеү комиссиялары 25 июлдән документтар алыуҙы туҡтата. 27 июлдә абитуриенттар уҡырға ҡабул итеү һөҙөмтәләре менән таныша аласаҡ. Республикала эшләгән дәүләт юғары уҡыу йорттарында быйыл бюджет урындар һаны - 11,5 мең.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АТЫҢ АРЫҒАНСЫ...

## сабып ҡал



**Атың арығансы сабып ҡалып буламы? Унын арырын алдан белә тороп, сабып ҡалырға тырышыу, кирећенсә, атыңды тиҙерәк эшлектән сығарыуға алып килмәйме? Арыған, янған атты аяҡҡа баҫтырыу өсөн нимәләр эшләргә кәрәк? Ошо һорауҙарҙы ат йәнле ике кешегә бирep ҡараным.**

Иң тәүҙә тыуған ауылымда йәшәүсе балалыҡ дуҫым, яҡын туғаным, тыуғанынан алып ат өҫтөнән төшмәгән, хәҙер ауылыбыҙ мәсетенең имам-хатибы булып торған Насибулла Усмановҡа төбәнем был һорауҙы. Ул түбәндәгесә яуапланы:

-Ат ике осраҡта - янһа һәм арыһа бөтөнләй йөрөүгә эшкинмәй. Шуға күрә атың арығансы, сабып ҡалһаң, байтаҡ юл үтеп өлгөрәһең, барыр ереңә етеп, эшләр эшеңде эшләп ҡалаһың инде. Был әйтемде шул мәғәнәлә әйткәндәрҙер тием. Ә инде янған йә арыған атты аяҡҡа баҫтырыр өсөн байтаҡ ваҡыт талап ителә. Ат ике осраҡта ғына ята. Тәүгеһендә - инәһенән тыуған сағында, икенсеһе - үлер ваҡыты еткәс ергә ята. Аттар аяғөҫтә тороп йоҡлай, йәғни юшай. Аттар арығанда йә янған саҡта шулай уҡ ергә ята. Янған һәм арыған ат быуынһыҙ була, тиҙ генә тирләп бара, ашамай, көндән-көн ябыға. Ундай атты аяҡҡа баҫтырыр өсөн ҡышҡы селлә кәрәк. Беҙ шундай көндө янған йә арыған атыбыҙҙы санаға егәбеҙ ҙә, уны тирләгәнсе ҡыуалап йөрөтөп килтереп, таң атҡансы башын өҫкә шаҡарып бәйләп ҡуябыҙ. Был ысулды өлкәндәр "атты таң ашырып һыуытыу"тип атай. Ат таңға тиклем шыҡырҙап ҡатып тора, шунан иртәнсәк алдына саҡ ҡына ҡоро бесән һалабыҙ. Бер аҙҙан һыу эсерәбеҙ, һоло бирәбеҙ. Бына шунан һуң аттың арыуы ла юҡҡа сығып, аппетиты барлыҡҡа килә. Ул ашарға керешә, яйлап мандып китә. Арыған һәм янған атты йылдың тик бер миҙгелендә - ҡышҡы селләлә генә һыуытыу мөмкин булғас, ҡалған ваҡытта йәйәү йөрөп торађың инде. Бәлки, шуның өсөн дә атың арығансы, сабып ҡал, тигәндәрҙер.

Икенсе әңгәмәсем элекке уҡытыусым, хәҙер Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромы баш табибы Халис Килдеғошов. Бына уның һөйләгәндәре:

-Арыған атты кире аяҡҡа баҫтырыуҙы халыҡта һыныҡтырыу тип атайҙар. Атай-олатайҙарыбыҙ арыған йә янған атҡа андыҙ ҡайнатып эсергән, һыуытҡан. "Ирәүән барҙа, ир үлмәй, андыҙ барҙа, ат үлмәй" мәҡәле шунан килеп сыҡҡан. Беҙҙең ипподром аттары 120 саҡрымға сапҡан саҡта арый. Был осраҡта беҙ аттар ошо араның һәр 40 саҡрымын үткән һайын, һаулығын тикшереп, артабан ебәрергәме-юҡмы икәнен хәл итәбеҙ. Мин шулай ҙа, аттарҙың һаулығы өсөн яуаплы кеше булараҡ, уларҙы арығансы саптырып ҡалыу яғында түгелмен. Арығансы сабып ҡалам, юл ыратып ҡалам, тигән принцип менән эш итһәң, атыңды бөтөнләйгә эшлектән сығарыуың да бар бит. Һәр хәлдә, аты арып, йәйәүгә ҡалған ир маҡталмайҙыр ул.

Шуға күрә мин "Атың арығансы, сабып ҡал" тигән әйтемде бөтөнләй башҡа мәғәнәлә аңлайым. Дөрөҫөрәге, был әйтем аттар хаҡында булһа ла, кешеләргә төбәп әйтелгән. Кешенең ғүмере лә старт менән финиш араһын сабып үткән ат ғәмәле кеүек кенә бит. Йылдың яҙы, йәйе, көҙө, ҡышы булған һымаҡ, ғүмерҙең дә сабый, йәш, ир уртаһы һәм ҡарт саҡтары була. Сабый сағында ҡолон һымаҡ уйнаҡлап ҡына йөрөйһөң, йәш сағында арыуҙың ни икәнен дә белмәй бәйгелә елдерәһең, ир уртаһы сағында һәлмәк юртыуға күсәһең, ҡарт сағында инде атлап ҡына барырлыҡ хәлең ҡала, тиҙ генә арып бараһың. Атың арығансы, сабып ҡал, тигәндә ғүмерең үтеп ҡартайғансы, елдереп йөрөр хәлең бар ваҡытта барлыҡ эштәреңде эшләп, донъя ҡороп, балаларыңды аяҡҡа баҫтырып, ейән-ейәнсәрҙәреңде күреп, иркәләп, йәшәп ҡал, тип аңларға кәрәк инде. Әйтем аттар хаҡында булһа ла, ғүмер, донъя фанилығы хаҡында, минеңсә.

Әхмәтзәки Вәлидиҙәр, Бабичтар халҡыбыҙ үҙаллылығы, унын автономияһы өсөн көрәшкән саҡта улар 20 менән 30 йәш араһында ғына булған. Улар аттары арығансы сабып ҡалып, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә халҡыбыҙ автономияһын яулау ғына түгел, Рәсәй федерализмының нигеҙ ташын һалыуға өлгәшеп ҡала. Улар ирешкән уңыш менән бер башҡорт халҡы ғына түгел, Рәсәй составындағы башҡа бик күп халыҡтар файҙалана...

Халис Килдеғошовтың фекерен ошо ерҙә күтәреп алып, артабан үҫтергә килә. Бында "Атың арығансы, сабып ҡал" әйтеменең тағы ла бер мәғәнәһе асыла төшә. Ысынлап та, октябрь инҡилабы ваҡытында заман тарафынан бирелгән форсат-әмәлде файҙаланып ҡалырға өлгөрә Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт милли хәрәкәте. Ул форсат-әмәл бер беҙгә генә түгел, батша Рәсәйенең башҡа бик күп аҙ һанлы халыҡтарына бирелә һәм уны башҡорттар тормошҡа ашырып ҡала, йәғни аттары арығансы, сабып ҡала. Кем белә, революция үткәндән һуң был форсатты файҙаланыу, бәлки, мөмкин дә булмаҫ ине. Бында "Атың арығансы, сабып ҡал" әйтемен үҙгәртеп "Бирелгән форсат-мөмкинлекте, ул ҡулдан ысҡынмаҫ борон тормошҡа ашырып ҡал", тип тә аңларға була бит. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә илебеҙҙә барған үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә йәшәүсе урыҫ булмаған милләттәргә тағы ла бер тапҡыр форсат-мөмкинлек бирелде. Әле килеп ил буйынса власть вертикале тормошҡа ашырылған саҡта беҙ тағы ла шул уҡ һорауҙы үҙ-үҙебеҙгә бирәбеҙ: "Милләтебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү, республикабыҙ үҙаллылығын нығытыу өсөн бирелгән ошо форсат-мөмкинлекте беҙ ниндәй кимәлдә файҙаланып ҡалдыҡ, атыбыҙ арығансы, сабып ҡалдыҡмы?"

-Абдулҡадир Инандың башҡорттарҙа ат тәрбиәләү хаҡындағы ғилми хеҙмәте Ер шарының 40 телендә нәшер ителгән, тиҙәр. Тик беҙҙең телдә генә күренмәй ул хеҙмәт. Шул китапты тиҙерәк күргe килә. Атыбыҙ арығансы... - ти ат йәнле уҡытыусым Халис ағай Килдеғошов.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ПАРАДОКС

## КӘКҮК НИҢӘ ҺАҠАУЛАНА?

**Кәкүктең ни өсөн сит ҡош ояһына йомортҡаһын һалып, себешен баҫып сығарыуы хаҡында гәзитебеҙҙең бер һанында яҙып сыҡҡайныҡ инде. Бактиһәң...**

Баҡтиһәң, тап шул себеше баҫылып сығып, ҡанат һәм быуын нығытҡан арала кәкүктең ауыҙынан ағыулы матдәләр бүленеп сығып, улар себеште үлтерә икән. Ни өсөн тигәндә, ҡоштар балаларын фәҡәт суҡышына эләктереп алып килгән ем менән туйындыра. Баҡтиһәң, кәкүк балаларын һаҡлап ҡалыр өсөн шул хәлгә бара икән дә, баҡтиһәң, балаларын ташлап китеүсе әсәләргә "кәкүк әсә" тип әйтеү бөтөнләй дөрөҫ түгел икән. Бына һиңә кәрәкһә!

Ә бына йәмле йәй ҙә үтмәстән кәкүктең һаҡауланыуын нисек аңларға була һуң? Был һорауға яуап бирер өсөн тағы ла берећенә яуап эҙләйек: ғөмүмән, кәкүк ни өсөн ҡыҫҡыра ла, уның тауышындағы һағышты нимә менән аңларға була? Һе, тәбиғәттә бар тереклек донъяһы илаһи гармонияға ҡоролған һәм, әлбиттә, балаһын һағынған әсә ошо рәүешле үҙәк өҙгөс һағышын белдерә. Кешеләр донъяһындағы әҙәбиәт, сәнғәт өлкәләрен генә алайыҡ. Шатлыҡ тойғоһо кисергәндә һағышлы йырҙың йә башҡа төрлө сәнғәт йә әҙәбиәт әҫәренең тыуыуы мөмкинме? Юҡ.

Әсә кәкүк балаһының янына хәҙер үк осоп ҡына барып етер ине лә, тәбиғәт шулай ҡуша. Әлбиттә, кешеләр бындай һағышҡа түҙмәҫ ине, барыбер балаһына интылыр ине. Ҡоштар кешеләргә ҡарағанда тәбиғәткә тоғорараҡ барыбер. Улар иң тәүҙә үҙ тәбиғәтенә тоғро.

Ошо юҫыҡта ҡарағанда йәй уртаһында кәкүктең һаҡауланып, аҙаҡ тынып ҡалыуын фәҡәт балаһы менән осрашыу бәхетен кисереүенән тыуған һиллек тип кенә аңларға булалыр. Ысынлап та, балаһы менән осрашҡан әсәгә нимәгә кәрәк шул рәүешле һағышланыу?

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Август аҙаҡтарында ла ҡайһы саҡ кәкүктәр күкелдәү тауышын сығарып ҡуйыусан. Уларын инде айырылышып торған арала балаларын юғалтҡан әсәләр һағышлы тип аңларға булалыр.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Был аҙнала Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһының Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығында үткән кәңәшмәлә юғары технологиялар өлкәһендә технопарктар булдырыу федераль программаһын үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды. Кәңәшмәлә Рәсәй технопарктарының яңы перспективаларға эйә була барыуы һәм уларҙың киңәйтеләсәге билдәләнгән. Башҡортостан да ситтә ҡалмаясаҡ, әле "Ҡурай " исемле технопарк ойоштороу проектын Федераль үҙәк менән бергәләп финанслауға ғариза бирелгән.

✓РФ Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе июль өсөн түләүҙәрҙе тамамланы. Бүлексә вәкәләтендәге пенсиялар һәм социаль түләүҙәр быйыл ваҡытында һәм тулы күләмдә иҫәпләнгән. БРҙың Пенсия фонды идаралығы етәксеһе Фоат Хантимеров билдәләүенсә, беҙҙең төбәктә Фонд иҫәбенә пенсия һәм социаль түләүҙәр алыусы пенсионерҙар һаны 1 миллион 58 мең кеше тәшкил итә. Быйыл пенсионерҙарға һәм льготаға эйә булыусыларға 61 миллиард һумдан ашыу, шул иҫәптән июль өсөн 9,2 миллиард һум аҡса күсерелгән. Быйыл 1 февралдән илдә хеҙмәт пенсиялары 8,8 процентҡа индексацияланды. Бынан тыш, 1 апрелдән социаль пенсиялар - 10,27 процентҡа, шулай уҡ ай һайын бирелгән аҡсалата түләүҙәр күләме 6,5 процентҡа арттырылды. Индексация һөҙөмтәһендә ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме Башҡортостанда 8300 һумға еткән.

✓Илдә хәрби хеҙмәткә саҡырыу тамамланды. Башҡортостан Рәсәйҙең башҡа төбәктәре араһында алдынғылар иҫәбендә. 1 апрелдән 15 июлгә тиклем республиканан 8100 егет хәрби хеҙмәткә алынған. Дөйөм алғанда, Үҙәк хәрби округы хәрби комиссариаттары бөтәһе 102 мең егетте әрме сафына алған, уларҙың өстөн бер өлөшө округ территорияһында хеҙмәт итәсәк. 72 кеше альтернатив граждан хеҙмәтен һайлаған.

✓Өфө хоккей клубының генераль директоры Вадим Рыбинский үҙ вазифаһынан китте. "Салауат Юлаев" клубының яңы генераль директорының исеме ошо көндәрҙә билдәле буласаҡ. Үйын тамамланып торған быйылғы миҙгел "Салауат Юлаев"тың команда составында ғына түгел, ә етәкселәре араһында ла үҙгәрештәргә бай булды. Яңы ғына Николай Курапов менән Әнүәр Мәхмүтов үҙ вазифаһынан бушатылды, хәҙер клубтың идаралығын баш ҡала мэры Павел Качкаев етәкләй.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ШАҺИТ КҮРҺӘТМӘЛӘРЕ... талап ителмәй

**РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығының 2011 йылдың 31 мартында сығарылған "Ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһын ваҡытынан алда тәғәйенләүгә хоҡуҡ биреүсе эш осорҙарын дөрөҫләтеү тәртибен раҫлау тураһында" бойороғо үҙ көсөнә инде. Был Тәртиптә ҡартлыҡ буйынса пенсияны ваҡытынан алда тәғәйенләүгә хоҡуҡ биреүсе эш осорҙары билдәләнгән.**

- Гражданды страховкаланған кеше сифатында теркәтеүгә тиклем -эш биреүселәр йәки тейешле дәүләт (муниципаль) органдары биргән документтар нигеҙендә;
- Теркәлгәндән һуң - шәхси иҫәпкә алыу мәғлүмәттәре нигеҙендә.

Ошо уҡ документта ваҡытынан алда пенсияға хоҡуҡ биреүсе һәм раҫланырға тейешле эштәрҙең тулы исемлеге килтерелә. Был исемлектә 24 позиция бирелгән һәм улар менән Рәсәй Пенсия фонды рәсми сайтының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе битендә танышырға мөмкин.

Раҫланған был Тәртиптә ҡартлыҡ буйынса ваҡытынан алда хеҙмәт пенсияһы тәғәйенләнеүгә хоҡуҡ биреүсе һәм закондар тарафынан ҡаралған эш үҙенсәлеге һәм башҡа күрһәткестәр шаһиттар күрһәтмәләре менән раҫлана алмай. Шул уҡ ваҡытта документта граждандың страховкаланған шәхес сифатында теркәгәнгә тиклем ваҡытынан алда пенсия тәғәйенләү хоҡуғы биреүсе айырым эш осорҙарын раҫлау үҙенсәлектәре, шулай уҡ эш осорҙарын раҫлау өсөн эш биреүселәр йәки тейешле дәүләт (муниципаль) органдар тарафынан бирелгән белешмәләргә ҡарата талаптар билдәләнгән.

Рәсәй Пенсия фонды идараһы ағзаһы, БР буйынса идарасы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 2010 йылда ваҡытынан алда пенсияға сығыуға үҙ хоҡуҡтары менән бөтәһе 16 мең 261 кеше файҙаланған. Шуларҙың 47,3 проценты - зыянлы эш шарттарында эшләүе менән бәйле, 20,4 проценты- педагогтар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре, 14,2 проценты - Алыҫ Себерҙә эшләүселәр һәм 3,8 проценты эш менән тәьмин итеүсе органдар тәҡдиме буйынса эшһеҙҙәр.

**Рәсәй Пенсия фонды БР буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте.**

ОҺО, ЯҠШЫ ЗАКОН!

**Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһында йәш ғаиләләргә ярҙам тураһында"ғы Законына, 2011-2015 йылдарға иҫәпләнгән "Торлаҡ" маҡсатлы федераль программаһының "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" подпрограммаһына ярашлы, Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән 2011-2015 йылдарға республикала йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙе күҙаллаған дәүләт программаһын раҫланы. Программаны финанслау 4,815 миллиард һумлыҡ буласаҡ. Ҡабул ителгән Программаға ярашлы, ошо йылдар эсендә барлығы 7500 йәш ғаиләгә дәүләт ярҙамы күрһәтеләсәк тип күҙаллана.**

# ЙӘШТӘРГӘ ҠЫУЫШТА ЛА ОЖМАХ,

## әммә фатирҙа яҡшыраҡ...



Республикала быға тиклем дә ошондай уҡ программа эшләп килде һәм ул үҙ эсенә 2003-2010 йылдарҙы алды. Ошо йылдарҙа өлгәшелгән һөҙөмтәләргә ҡарамаҫтан, йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү әле лә иң актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Бөгөнгә республикала 28 меңдән ашыу йәш ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса сиратта тора. Шулай уҡ республикала йыл һайын 27 мең тирәһе ғаилә теркәлеп, шуларҙың 80 процентын йәштәр тәшкил итә. Ләкин ҡоролған ғаиләләрҙең 20 проценты беренсе йылда уҡ тарҡала. Йәш ғаиләләрҙең айырым торлаҡтары булмау ҙа бының бер сәбәбе булып тора. Шуға күрә, әлеге Программаның төп маҡсаттарының береһе - йәш ғаиләләргә социаль йәки ведомствоға ҡараған торлаҡ ҡына көтөп ултырырға түгел, ә дәүләт тарафынан бирелгән льготалы шарттарҙы ҡулланып, үҙенә торлаҡ һатып алыуҙың йәки шәхси йорт төҙөүҙең өҫтөнлөгөн күрһәтеү.

Программаға ярашлы, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға дәғүә итеүсе йәш ғаилә даими йәшәгән урындағы хакимиәт тарафынан, торлаҡ шарттары яҡшыртыуҙы талап итә, тип табылған булырға тейеш. Шулай уҡ ғаиләнең торлаҡ хаҡын түләр өсөн йыйылған аҡсаһы йәки кредит суммаһын ҡапларлыҡ килеме булыуы ла шарт. Программала ҡатнашыусы йәш ғаилә башлыҡтары 35 йәштән өлкән булмаҫҡа тейеш. Тулы булмаған (ғаиләлә тик атай йәки әсәй генә булыуы һәм уның бер йәки унан да күберәк бала тәрбиәләүе) йәш ғаиләләр ҙа был Программаға инә. Элекке программаға ярашлы, бюджет өлкәһендә эшләгән йәш ғаиләләргә генә субсидия алыуға өҫтөнлөк бирелһә, 2011-2015 йылдарға иҫәпләнгән программанан был пункт алынған. Программаға ярашлы, дәүләт ярҙамында торлаҡ шарттарын яҡшыртыу мөмкинлеге йәш ғаиләгә тик бер тапҡыр ғына бирелә.

Программала ике төр ярҙам ҡаралған. Беренсенән, һатып алынған торлаҡты субсидиялау. Дәүләт төҙөлөп ятҡан йәки һатып алынған әҙер торлаҡ хаҡының иң күбе 35 процентын субсидиялай ала. Социаль түләүҙе әҙер йәки төҙөлөп ятҡан торлаҡты һатып алыуға, үҙ йортонды төҙөүгә, кооперативта беренсе пай взносы йәки торлаҡ кредитының төүге взносы итеп тотонорға була. Аҡса дәүләткә кире ҡайтарылмай. Балалары булмаған ғаиләләр 42 квадрат метр майҙанлы торлаҡ алыуға дәғүә итә ала, ә өс йәки унан да күберәк кешенән торған ғаиләләр һәр бер ағзаһына 18 квадрат метр торлаҡ алыу хоҡуғына эйә. Торлаҡ хаҡын квадрат метрына 27800 мең һумдан иҫәпләгәндә, балалары булмаған ғаилә иң күбе 350 мең һум күләмендә субсидия алырға мөмкин, ә балалары булған ғаиләләр иһә - 525 мең һум. Быйыл бындай субсидия менән республикала 500-ләп йәш ғаилә файҙалана аласаҡ. Бының өсөн бюджеттан 200 миллион һум аҡса бүленә. Әгәр ҙә һеҙ әле үк программала ҡатнашыусы булып тораһығыҙ икән һәм ғаиләгеҙҙә бала тыуһа (йәки уллыҡҡа алынһа), һеҙ дәүләт тарафынан ҡаралған икенсе төр субсидияға - бала тыуыуға бирелгән субсидияға - дәғүә итә алаһығыҙ. Демографик хәлдә яҡшыртыуығыҙ өсөн дәүләт һеҙгә 8 квадрат метр (бер балаға), 12 квадрат метр (икенсе балаға) һәм 16 квадрат метр (өсөнсө һәм ҡалған балаларға) бүләк итә.

Тағы ла бер һөйөнөслө хәбәр: Рәсәй Федерацияһының Төбәктәр үҫеше министрлығы 2011-2015 йылдарҙа "Торлаҡ" федераль маҡсатлы программаһының "Йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" өҫтәмә программаһында ҡатнашыусылар исемлегенә Башҡортостанды ла индергән. Беҙҙең республика бындай программаға инеүсе 77 Рәсәй төбәге араһында.

Әлбиттә, Программа йәш ғаиләләргә ярҙам итеү маҡсатында, уларҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы күҙ уңында тотоп эшләнгән тип әйтеп була. Ләкин аҡ ҡағыҙҙа яҙылғанды барыһы ла аңлайышлы һәм еңел күренһә лә, уны тормошҡа ашырыуы асылда нисек икәнлеген белеү өсөн Программа менән яҡындан таныш йәш ғаиләләргә мөрәжәғәт иттек:

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә йылдың тәүге яртыһында бюджеттың үтәлеше тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Ағымдағы йылдың алты айы эсендә ҡала бюджетына 7,2 миллиард һум күләмендә килем ингән, ҡала килеме буйынса Өфөнөң бюджеты 4,6 миллиард һум күләмендә үтәлгән, был йыллыҡ пландың 47,6 процентын тәшкил итә.

✓Ярты йыл эсендә Өфөлә 246,5 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән һәм файҙаланыуға тапшырылған. Быйыл баш ҡалала бөтәһе 650 мең квадрат метр торлаҡ төҙөләсәк. Уларҙың 300 меңе күп ҡатлы йорттарҙа булһа, 350 меңе - шәхси йорттар. Бер квадрат метрҙың хаҡы яҡынса 38 мең 500 һум тәшкил итә.

✓Совет районында йәшәүселәрҙең һорауы буйынса Башавтотранс 42-се социаль автобус маршрутын яңынан асты. Ул "Йәшел саулыҡ" санаторийы" туҡталышынан "Ғәбәйҙуллин урамы", "Злобин урамы", "БСТМ автобазаһы", "94-се мәктәп", "Белая река" нәшриәте", "Киров урамы", "Әй урамы", "8-се Март урамы", "БДАУ", "Матбуғат йорто" туҡталыштары аша Үҙәк баҙарға тиклем йөрөй.

✓Өфөлә 25-27 октябрҙә VIII "Ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы - 2011" күргәҙмәһе үтәсәк. Ул Башҡортостандың ресторан ҡунаҡханалар бизнесы донъяһында иң мөһим ваҡиғаларҙың береһе. Был сарала күргәҙмә менән бер йәһәттән, төбәк-ара кулинария һәм сервис чемпионаты, санаторийҙар, рестарандар һәм ҡунаҡханалар араһында конкурс, оҫталыҡ дәрестәре, конференциялар, "түңәрәк өҫтәл"дәр ойоштороласаҡ.

✓Санкт-Петербург ҡалаһында балалар һәм үҫмерҙәр араһында үткән "Аҡ төндәр" халыҡ-ара конкурс-фестивалендә Өфөнән 10 йәшлек Лилиә Ғәрәева II дәрәжә диплом яулаған. Ҡыҙ конкурсҡа килгән вокалистар араһында иң йәше булған. Лилиә "Юғары кимәлдәге әҙерлек өсөн" дипломы менән дә бүләкләнгән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Ҡайнар пейджер"ына июнь айында 19,5 мең кеше мөрәжәғәт иткән. Мөрәжәғәт итеүселәрҙең күбеһен торлаҡ йорттарҙы ремонтлау, йорттарға йылы һәм һыуыҡ һыу биреү менән өҙөклөктәр, ҡыйыҡтарҙы, кварталдар эсендәге юлдарҙы ремонтлау, сүп-сарҙы ваҡытында сығарыу кеүек мәсьәләләр борсой.

**Булат Юламанов, Баймаҡ ҡалаһы:** "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" Программаһына ярашлы, 2009 йылда сиратҡа торҙом. Сиратҡа теркәлгәндә 444-се урында инем, бөгөнгө көнгә 414-се урынға еттем. Баймаҡта сиратҡа тороу әллә ни ауыр булманы, тип әйтер инем, сөнки, мәсәлән, баш ҡалала сиратҡа тороусылар кеүек, ниндәйҙер белешмә артынан район-ҡала араһында ваҡыт һәм аҡса сарыф итеп, сабып йөрөү булманы. Мәскәү ҙә ҡапыл тәҙәлмәгән бит, бөгөн булмаһа, иртәгә сиратыбыҙ етер тип, әлегә үҙ көсөбөҙ менән шәхси йорт төҙөйбөҙ.

**Алһыу һәм Урал Күсәрбаевтар, Йылайыр районы:** 2008 йылда үҙ районыбыҙҙа сиратҡа торҙоҡ һәм 2010 йылдың июнь айында ҡулыбыҙға 182 меңгә таныҡлыҡ тапшырҙылар. Беҙ был сумманы шәхси йорт төҙөү өсөн алған ссуданы ҡаплау өсөн тотондоҡ. Көҙгә инде, Алла бирһә, үҙебеҙҙең ике ҡатлы шәхси йортобоҙға сығырға уйлайбыҙ. Программаға эләгеү ауыр тиеүселәрҙе тыңламай, сиратҡа торорға йөрьәт итеүебеҙгә ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Әлбиттә, ҡыйынлыҡтар булды, тик улар булмаһа, ҙур ҡыуанысыбыҙҙың тәме лә сөсөрәк булыр ине.

**Ғәлиә һәм Ғәлим Сәйфуллиндар, Өфө ҡалаһы:** 2008 йылда Өфө ҡалаһында ошо Программа буйынса сиратҡа торҙоҡ. Иң үҙәккә үткәне кәрәкле документтар йыйыу һәм уны йыл да яңыртып тороу булды. Мәсәлән, Теркәү палатаһынан бер белешмә алыр өсөн бер кешегә 520 һум аҡса түләргә кәрәк, шулай уҡ БТИ-нан мәғлүмәт алыу ҙа түләүле. Уйлап ҡарағыҙ әле, нисек итеп бер белешмә 520 һум торорға мөмкин? Ярай инде, уныһына күҙ йомаһың, ә ул белешмәне алыр өсөн тамуҡтың бөтә түңәрәген урап сығаһың. Бөтә белешмәне йыйып бөтөп, инде теркәлергә барһаң, белешмәнең йә бер хәрефе яңылыш яҙылған, йә булмаһа мисәте асыҡ күренмәй һәм башҡа сәбәптәр табылыуы мөмкин. Шуға күрә был сиратҡа йәки бик ныҡ түҙемлелеләр генә, йәки "блат" буйынса ғына эләгәләр. Сиратҡа эләгеп тә, кәрәкле ваҡыттан бер көнгә генә документтар яңыртыуға һуңланың икән, автоматик рәүештә төшөп ҡалаһың. Шуға күрә, барлыҡ туған-тумасаны һыҡҡылап-ҡаҡҡылап аҡса йыйып, "Үҙ өйөм" программаһы буйынса Шамонинола йорт алдыҡ һәм әлеге ваҡытта төҙөләш алып барабыҙ. "Үҙ йортом" программаһына эләккәс, Йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү Программаһынан автоматик рәүештә төшөп ҡалдыҡ. Тик бында шуны билдәләп үтергә кәрәк: "Үҙ йортом" Программаһына сиратҡа баҫҡанда беҙҙең "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" Программаһында сиратта тороуыбыҙ ҙа иҫәпкә алынды.

**Алһыу һәм Рәил Мостаевтар, Шишмә районы:** 2009 йылда район хакимиәтенең Йәштәр бүлегенә ошо һорау менән мөрәжәғәт иттек, тик беҙҙе, даими теркәү урыныбыҙҙа квадрат метрыбыҙ етерлек һәм торлаҡ шарттарыбыҙ яҡшыртыуҙы талап итмәй, тигән һылтау менән сиратҡа ҡуйманылар. Аңлайбыҙ, улар законға ярашлы эш итә, тик йәш ғаиләнең үҙ тормошо, үҙ көнитмеше булырға тейеш, ә әлеге ваҡытта беҙ ҡәйнә һәм ҡайны, бала менән беҙҙең йәш ғаилә, тағы ла ике өлкән кеше менән бер өйҙә ғүмер кисерәбеҙ. Ләкин башты ташҡа ярып булмай, тормош дауам итә, нимәләр уйларға һәм хәл итергә кәрәк. Кемдәндер көтөп ятҡансы, яйлап булһа ла, үҙебеҙ ҡыбырлайбыҙ.

**Сәлимә һәм Риф Сәйетовтар, Өфө ҡалаһы:** Өфөлә озаҡ йылдар эшләһәк тә, ҡалала даими теркәү булмау сәбәпле, районға ҡайтып, сиратҡа торорға тура килде. Быйыл өсөнсө йыл торабыҙ, сиратҡа баҫҡанда 250-се инек, быйыл документтар яңыртҡанда 200-сө баҫҡысҡа күтәрелгәнебеҙҙе белдек. Йәшебеҙ үткәнсе алып ҡалырбыҙ тип ышанабыҙ ҙа ул, тик өс йыл эсендә 50 ғаиләгә көмәгән сират ике йылда күпмегә көмер икән?..

**Шулай итеп, яңы Программа старт алды. Күреүебеҙсә, барыһы ла шыма ғына түгел: йә даими теркәү урыны менән ауыр хәлдәр килеп тыуа, йә башҡа төрлө сәбәптәр юлға арҡыры төшә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, Программа эшләй һәм 2003-2010 йылдарҙа торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға дәүләт тарафынан 11875 йәш ғаилә ярҙам алған. 2171 йәш ғаилә льготалы кредит, 1602 ғаилә - льготалы фатир, 3343 ғаилә - торлаҡ алыуға һәм шәхси йорт төҙөүгә социаль түләүҙәр, 4759 ғаилә - бала тыуғанға (йәки уллыҡҡа алғанға) субсидия алыуға өлгәшкән. 2003-2010 йылдарҙағы финанслау күләме 1855 миллион һумды тәшкил иткән. Шуға күрә йәш ғаиләләргә күңелдәрен төшөрмәй, булған бөтә мөмкинлекте файҙаланырға тырышырға кәрәк. Дәүләт йәш ғаиләләрҙең киләсәген уйлап, төрлө программалар ҡабул итә икән, тимәк, йәштәрҙең үҙҙәренә лә уяурак, әүҙемерәк һәм йылдамыраҡ булыу мөһим.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

## ҺОРАУ - ЯУАП

## АЙЫРЫМ ТОРЛАҠҠА МОХТАЖ

**Дөйөм майҙаны 60 кв. метр булған коммуналь фатирҙың бер бүлмәһендә улы менән әсәһе йәшәй. Әсәнең, ире Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, тигән документы бар. Йыш ауырығанлыҡтан, ул айырым торлаҡҡа мохтаж, ләкин хакимиәт был мәсьәләне ыңғай хәл итмәгән. Тағы ҡайҙа мөрәжәғәт итергә була?**

Хаттан бигүк аңлашылып етмәй. Хакимиәт ниндәй нигеҙҙә баш тарта: әсәне торлаҡҡа мохтаж тип иҫәпкә ҡуйыуҙанмы, әллә торлаҡ биреүҙәнме? Мәсьәләнең бөтә нескәлектәрен белмәй тороп, бында бер төрлө генә яуап бирә булмай. Шулай ҙа РФ Торлаҡ кодексының 54-се статьяһына ярашлы, ниндәй хәлдәрҙә торлаҡҡа мохтаж сифатында иҫәпкә ҡуйыуҙан баш тартыу осраҡтарын иҫкә төшөрөп үтәбеҙ.

Беренсенән, РФ Торлаҡ кодексының 52-се статьяһы 4-се өлөшөндә ҡаралған документтар, атап әйткәндә, иҫәпкә алыу хаҡында ғариза; әлеге граждандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар сифатында иҫәптә тороуға хоҡуҡтарын раҫлаусы документтар әҙерләп бирелмәгән осраҡта. Ғариза тапшырған кешегә орган тарафынан был документты ҡабул итеп алыу ваҡыты һәм документтарҙың исемлеге күрһәтелеп, расписка бирелә.

Йә булмаһа, әлеге граждандарҙың шундай иҫәптә торорға тейешлеген раҫлаған документтары тапшырылмаған осраҡта.

Әгәр ҙә әле һүҙ барған Кодекста иҫкә алынған һәм 53-сө статьяла ҡаралған "үҙҙәренең торлаҡ шарттарын аңлы рәүештә насарайтыу әҙәмтәләре" тигән билдәләмәнең ваҡыты әле үтмәгән хәлдә. Был статьяға ярашлы, бындай дәғүәселәр аңлы рәүештә эшләнгән ғәмәлдә ҡылыуҙарына 5 йыл үткәндән һуң ғына иҫәпкә ҡуйыла.

Иҫәпкә алыуҙан баш тартыу тураһындағы ҡарарҙа етешһеҙлектәр йәки закон боҙоуҙар мотлаҡ күрһәтелеп, баш тартыуҙың сәбәптәре нигеҙләнергә тейешле. Бындай нигеҙләмә ғариза яҙған кешегә уны ҡабул итеп алғандан һуң өс эш көнөнән дә һуңға ҡалмайынса тапшырылырға тейеш. Торлаҡ биреүҙән баш тартыу фактына суд аша дәғүә белдереү ҙә ҡаралған.

## МИРАҪСЫ - АТАЙЫҒЫҘ

**Өләсәйем менән атайым бер бүлмәле фатирҙы яртышар өлөштән хосусилаштырған. Өләсәйем үлгәс (атайым, ул васыятнамә ҡалдырманы, ти), атайым фатирҙы тулыһынса үҙ исеменә күсертте. Мин был фатирҙа тыуғандан алып теркәлгәнмен. Ҡатыным һәм улым менән беҙҙе сығып китергә мәжбүр иткәнсе ошонда йәшәнек. Өләсәйем үлгәндән һуң атайым фатирҙы тулыһынса үҙ исеменә хосусилаштырған саҡта закон буйынса минең ризалыҡ биреүем иҫәпкә алынырға тейеш түгел инеме ни?**

- Был эш буйынса һеҙ тулы мәғлүмәткә эйә түгел, ахырыһы. Өләсәйегеҙ үлгәндән һуң фатир ҡабаттан хосусилаштырыла алмай. Бәхәсле хоҡуҡи мөнәсәбәттәр РФ Граждандыҡ кодексы - "Мираҫ хоҡуғы"ның 3-сө өлөшөндә ҡаралғанса көйләнә.

Әлеге Кодекстың 1111-се статьяһына ярашлы, мираҫ алыу васыят буйынса һәм закон буйынса ғәмәлгә ашырыла. Закон нигеҙендә вариҫтар мираҫ алыуға РФ Граждандыҡ кодексының 1142-1145 һәм 1148-се статьяларында ҡаралған тәртиптә саҡырыла. Бер сират мираҫсылар хоҡуҡ буйынса мираҫсыларҙы иҫәпләмәгәндә тигеҙ өлөштәрҙә мираҫ ала. РФ Граждандыҡ кодексының 1-се өлөшө 1142-се статьяһына ярашлы, закон буйынса тәү сират мираҫсылар тип балалар, ир йә ҡатын һәм ата-әсә иҫәпләнә. Әгәр бәхәсле фатир өләсәйегеҙ һәм атайығыҙ тарафынан һеҙ тыуғансы уҡ хосусилаштырылған булһа, ә өләсәйегеҙҙең тәү сираттағы башҡа мираҫсылары булмаған икән, атайығыҙ тарафынан был торлаҡтың 1/2 өлөшө мираҫ итеп законға ярашлы дөрөҫ алынған, тип иҫәпләргә нигеҙ бар. Шуға күрә атайығыҙ мираҫ алған ваҡытта һеҙҙең был фатирҙа теркәлгән булыуығыҙ иҫәпкә алынмаған һәм ризалығығыҙ ҙа кәрәкмәгән.

## БЕР БҮЛМӘ БИРЕЛӘ

**Ҡатыным менән айырылышҡанбыҙ, бер бүлмәле хосусилаштырылмаған фатирҙа йәшәйбеҙ. Йортобоҙҙан күсерергә тейештәр. Бәлиғ булмаған йәштәге ҡыҙым (әсәһе унан баш тартты) минең менән ҡалды. Ике енес вәкилдәре булараҡ, ҡыҙым менән миңә ике бүлмәле фатир бирергә тейештәрме әллә өсәүебеҙгә, элеккесә, бер бүлмә тейерме?**

РФ Торлаҡ кодексының 89-се статьяһының 1-се өлөшөнә ярашлы, башҡа торлаҡҡа күсереү менән бәйле, социаль яллау килешеүе буйынса бирелгән торлаҡ шундағы дөйөм йәшәү шарттарына ярашлы һәм дөйөм майҙаны буйынса элекке торлаҡ майҙанына тиң булырға, билдәләнгән талаптарға яуап бирергә һәм ошо уҡ йәшәгән урын сиктәрендә булырға тейеш. Тимәк, йорттан күсереү менән бәйле бирелә торған торлаҡ бинаһына ҡарата йәшәү урыны биләмәһендә булырға тейеш. Шулай итеп, иҫкергән йорттан күсереү сәбәпле бирелгән торлаҡ бинаһына закон тарафынан билдәле бер талаптар ҡуйыла. Шуға күрә, әгәр һеҙгә фатир торлаҡ шарттарын яҡшыртыу менән бәйле түгел, ә иҫке йорттан күсенеү сәбәпле бирелә икән, был фатирҙың майҙанына ҡарата закон тарафынан билдәле бер талаптар ҡуйыла. Шуға күрә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу менән бәйле түгел, ә бер йорттан икенсеһенә күсереү сәбәпле бирелгәнлектән, яңы торлаҡ майҙаны иҫкененеке менән бер тигеҙ булырға тейеш. Атап әйткәндә, һеҙгә бер бүлмәле фатир биреләсәк. Шул уҡ ваҡытта иҫегеҙҙә тотоғоҙ: яңы фатир бирелеүгә ҡарамаҫтан, һеҙҙең торлаҡ шарттарығыҙҙы яҡшыртыуға мохтаж булараҡ иҫәпкә тороу хоҡуғығыҙ һаҡланып ҡала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ашҡаҙан



Кемдең үҙ хужалығында тауыҡтары бар, улар йомортҡа менән ашҡаҙандың сей яраһын дауалай ала. 1 ҡалаҡ алоэ һуты, 1 балғалаҡ шәкәр ҡомо, 25-30 гр аҡ май, 1 балғалаҡ какао һәм яңы ғына һалынған йомортҡаны (бик булмаһа, кисәгеһе лә ярай) һытып, барыһын да һәйбәтләп болғатығыҙ. Был ҡатнашманы ас ҡарынға эсегеҙ һәм бер сәғәт бер нәмә лә ашамай тороғоҙ. Хәл яҡшырғансы көн һайын иртән ҡабатларға. Ғәҙәттә 1 курс 12-14 көн дауам итә. Был ваҡытта ҡаты диета тоторға, иҫерткес эсемлектәр ҡулланмаҫҡа, тәмәке тартмаҫҡа, сөнки никотин сей яраны тырнап тик тора, йүнәлергә бирмәй.

### Ҡорошҡаҡ

Аяҡты ҡорошҡаҡ (судороги в ногах) тотоу йышайһа, ҡан тамырҙары насарайып, күгәреп торған урындар барлыҡҡа килһә, етмәһә, аяҡтар тиҙ арый башлаһа, күберәк йәшел үләндәр, ҡабаҡ, һоло бутҡаһы, һоло ҡайнатылған һыу, шыйыҡ итеп бешерелгән йомортҡа, самалап сәтләүек, зәйтүн емеше, арпа оно ҡушып бешерелгән икмәк, ҡара емеш ашарға кәрәк. Ошо рәүешле диетала ултырһағыҙ, ике аҙнанан ҡорошҡаҡ тотоу бөтә, ә өс аҙнанан ауырыуҙың эҙе лә ҡалмаҫ.

### Юғары ҡан баҫымы

Юғары ҡан баҫымын нормаллаштереү өсөн табип ҡушҡан дарыуҙарҙы ҡабул иткән саҡта һәм дарыуҙарҙы эсеп бөткәс, ауырыу ҡабатланмаһын өсөн: 2 лимонды бик ваҡ итеп турап, 1,5 стакан шәкәр ҡомо менән болғатырға һәм 6 тәүлек тоторға. Был дауаны ашағандан һуң сәйгә ҡушып эсеп торорға. Беренсеһе бөтмәҫ элек тағы 2 лимонды шәкәр менән болғатырға һәм 6 тәүлеккә ултыртып тоторға. Өс тапҡыр шулай ҡабатлағас, сәйҙе лимон менән эсеүгә күсергә.

### Юл япрағы

10 грамм юл япрағын 200 грамм ҡайнар һыу менән төнәткәс, көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 15-20 минут алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Был ашҡаҙан һәм эсәктең хроник ауырыуҙары, әселек түбән булғанда файҙалы. Ошо уҡ төнәтмә ҡаҡырыҡ сығарыу өсөн дә яҡшы.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠАТЫНДЫҢ МЫЖЫҒАНЫНА... ҡаршы мыжырғамы, әллә түҙергәме?



**Донъяла бәхәсһеҙ булған факттар, һанай китһәң, шаҡтай йыйыла. Шулай ҙа улар араһында тормош көтөр өсөн айырыуса мөһимдәре бар.**

Мәсәлән, ҡатын-ҡыҙҙар психологияһының ирҙәрҙекенә ҡарағанда ғәйәт үҙенсәлекле булыуы бәхәсһеҙ. Йәғни ҡатын-ҡыҙҙарҙа хистәр, тойғолар айырыуса көслө була, ә ир-егеттәр иһә күберәк уйлап, аҡыл менән эш итә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа хислелек артыҡ көслө, тип әйтеү, әлбиттә, уларҙы бер нисек тә кәмһетмәй. Шулай уҡ ирҙәрҙәге баш, аҡыл менән эш йөрөтөү сифаты ла уларға бер ниндәй өҫтөнлөк бирмәй. Киреһенсә, был шарттарҙа ир-аттарға ҡатын-ҡыҙҙарҙы аңлай белергә кәрәк. Йәғни ир кеше ҡатын-ҡыҙ менән мөғәмәләлә уның шикелле үк хискә бирелмәскә, сабыр итергә, түҙемле булырға тейеш була.

Ҡатын-ҡыҙҙар алдында күрһәтелергә тейеш булған сабырлыҡтың, уларҙы аңлауҙың бер матур үрнәген беҙ хәлифә Хәҙрәти Ғүмәр миҫалында ла күрәбеҙ. Хәҙрәти Ғүмәр хәлифә булып торған заманда бер ир кеше хәләл ефетенең йыш ҡына хискә бирелеп, уны кәрәкмәгәнгә тиргәүенән тамам туйып, хәлифәгә зарланырға китә. Хәҙрәти Ғүмәрҙең өйөнә барып еткәс, ихтыярһыҙҙан ишек төбөндә туҡтап ҡала: эстән хәлифә ҡатынының моң-зар тулы тауышы ишетелә. Күрәһең, хистәре ташҡан сағы була. Әлеге кеше икеләнеп ҡала. Һәм, ниһәйәт, хәлифәнең өйөнә инеп тормай, ҡайтып китергә ҡарар итә. Нәҡ шул ваҡытта Хәҙрәти Ғүмәр (радиаллаху анху) өйөнән сығып, уны күреп ҡала һәм: "Берәй йомошоң бармы әллә? Нимә китергә йыйынаһың, әйҙә, һөйлә хәлдәреңде", - ти. Тегә кеше, бер аҙ икеләнеп торғандан һуң, былай тип һөйләй: "Ҡатынымдың көйһөҙлөгәнә зарланырға тип килгән инем. Ҡараһам, һеҙҙең ҡатынығыҙ ҙа нәҡ минеке кеүек икән. Әммә һеҙ уға ҡаты өндәшмәйһегеҙ, сабырлыҡ менән тыңлайһығыҙ икән. Быны күргәс, мин дә һеҙҙең кеүек үк сабыр итергә ҡарар ҡылдым". Хәлифә иһә былай ти: "Ҡатынымдың хис-тойғоға бирелгән саҡтарында аңлы рәүештә сабыр итәм, сөнки ул миңә күп яҡшылыҡтар ҡыла. Шулай булғас, нишә әле мин, уның тәбиғи ғәҙәтенә асыуым килеп, ҡаты яуап бирергә һәм ғаиләләге тыныслыҡты боҙорға тейеш? Ул минең ашарыма-эсеремә әҙерләй, керемде йыуа, өйөмдө йыйыштыра, балаларымды ҡарай, мине хәрәм эштәрҙән һаҡлай. Һанай китһәң, тағы әллә күпме яҡшылығы бар. Быны белә тороп, нисек итеп уға асыуланырға мөмкин?"

Ысынлап та, ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ бер-береһенә мохтаж йәндәр, улар бер-береһенән башҡа йәшәй алмай. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәттәре лә ике төрлө. Ни өсөн төрлө? Сөнки ҡатын-ҡыҙ бер төрлө, ә ир кеше - икенсе төрлө вазифалар башҡара. Шуға күрә ике яҡ та был айырмалыҡтарҙы белеп, бер-береһен аңларға һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе лә шул аңлашыу нигеҙендә ҡорорға тейеш.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ



## Туғыҙынсы һабаҡ: "Илама, ҡыҙыҡкаймы ни һин?"

Юрматы исемле ейәнемдең һорауынан һуң, уйланыуҙарымды яҙырға булдым:

- Өләсәй, һин бәләкәй саҡта илаңмы?
- Бәләкәй саҡта бала илай инде ул.
- Ә минең кеүек саҡта?
- Һинең кеүек саҡта бик иламағанмындыр. Һин ҙурайҙың бит инде.
- Ә һин ҡыҙыҡай бит. Ҡыҙыҡайҙар гел генә илай.
- Ҡыҙҙар илаҡ була тиһеңме әллә?
- Урамда бер ағай шулай тине.
- Ни эшләп улай тине һуң?
- Бына бит, тубыгымды һыҙырҙым. Ҡоланым да... иланым. Ағай миңә, һин ҡыҙыҡкаймы ни, ни эшләп илап ултыраһың, тине.
- Ҡыҙыҡайҙар ҙа, әсәйҙәр ҙә, өләсәйҙәр ҙә илаҡ булһа, һинең һымаҡ батыр малайҙарҙы кем үҫтерһен, балам? Ауыртҡас, әҙерәк илап ала инде кем булһа ла. Тик үкереп, оҙонозаҡҡа һуҙып, кеше ҡаңғыртып иларға ярамай.
- Ә һин нисек илай торғайның?
- Минең әсәйем, һинең ҡартөләсәйең, берәй ерең ауыртһа, аҙ ғына илап ал, тик мыжып, ауыртҡан ереңде иркәләп ултырма, ти торғайны.
- Ауыртыуҙы иркәләү нимә була?
- Мыжып илап ултырыуҙы әсәйем, ауыртыуыңды иркәләп ултыраһың, ти торғайны. Ауыртыуҙан йәш үҙенән-үҙе атылып сыға. Кеше шулай яратылған. Тимәк, һинең тәнеңдәге витаминдар бер-береһенә оран һала. Шунан улар оранды ишеткәс, бергә туплана ла ауыртыуыңды бөтөрөү өсөн көрәшкә сыға. Ә инде витаминдар, бергә тупланып, ауыртҡан ереңде уналтыу эше башлағас та илауҙан туҡтамаһаң, уларҙың хәле бөтә лә ҡуя. Шуға ҡысҡырып, оҙаҡ итеп иларға ярамай. Әсәйең дә ҡолап китеп, берәй ерен ныҡ итеп ауыртҡыһа, аҙ ғына балауыҙ һығып ала торғайны.
- Балауыҙ һығыу нимә була?
- Аҙ ғына илап алыу тигән һүҙ.

Бәләкәй малайҙар илаһа, беҙ, ғәҙәттә, ошо рәүешле тыйыу, тынысландырыу ишетәбеҙ. "Һин ҡыҙыҡкаймы ни?", "Ҡалай ҡыҙыҡкайҙар һымаҡ нескә күңеллеһең... Малайҙар улай булмай" һәм башҡалар. Ошондай тынысландырыуҙарҙан һуң, берәй ере ауыртып, һыҙланыуҙан йәки ғәрләнеүҙән күҙҙәренә йәш атылып сығып, тамағына төйөр ултырып, ни эшләргә белмәй аҡырып илап ебәргән ир бала ни эшләргә тейеш? Оялырғамы, тартынырғамы, ҡапыл илауҙан туҡтарғамы, йә булмаһа, үҙенең малай икәнлеген иҫкә төшөрөп, тукта, мин бит ҡыҙыҡай түгел, тип, ғорурлыҡ тойғоһо кисереп, күҙ йәштәрен йотоғамы? Ошондай тыйыу, тынысландырыу, йыуатыу шул тиклем киң таралған һәм ныҡ һеңгән, тел осонан ысҡынырға ғына тора. Хәҙер бала күңеленә ниндәй фекер һалыуыбыҙ тураһында уйлап ҡарайыҡ.

Нимә ул илау?

Беренсенән, боронғолар әйтеүенсә, илау, һөрәнләү, ҡапыл ыңғырашып ҡысҡырып ебәреү - тамаҡҡа ултырған төйөн йөрәккә һары булып ултырмаһын, йөрәк башҡайына ҡан һауҙырып сиргә юлыҡмаҫ өсөн кәрәк. Илаған саҡта кешенең нервы күҙәнәктәре бушай, көсөргәнеш кәмей, ауыртыныу ҙа, ҡайғы ла еңеләйә. Илау менән йырлауҙы тәбиғәт ерле юҡтан бар итмәгән. Малайҙар ҙа, хатта ирҙәр ҙә илай. "Буранбай", "Тәфтиләү", "Ҡара ат" "Ҡаһым түрә" кеүек һағышлы йырҙарҙың һүҙҙәрен, тарихи легендаларын ғына иҫкә төшөрәйек: Ҡаһым түрә үлтерелгәс, ҡайғынан шаңҡып, ҡәбер ҡаҙа алмай торған яугирҙар ҙа, Тәфтиләүҙең ҡанһыҙлығынан ярһыуҙары күкрәктәренә һыймай, йөрәк ярылырҙай ҡайғынан хәсрәт тарҡар өсөн бергә йыйылып, тауға артылып һыҡтап ултырған ҡарттар ҙа, Буранбайҙың хатын уҡып, ғәзелһеҙлек үҙәктәренә үтеүҙән миктәп ҡалған ауыл ҡарттары ла илай. Илау, тимәк, тәбиғи хәл.

Икенсенән, илаҡ ҡыҙыҡайға оҡшамаҫҡа тырышҡан малай кемде күҙ алдына килтерергә тейеш? Берәй яҡынын, әлбиттә. Туғанын, класташын, бергә уйнаған күрше ҡыҙыҡайын, хатта уҙа барып уйлаһаҡ, әсәһен күҙ алдына килтереүе лә ихтимал. Тимәк, илау - ул көсһөҙлөк, йомшаҡлыҡ, әргендеклек. Ә малайҙар иларға тейеш түгел, сөнки ҡыҙҙар ғына әргендек була. Малайҙы тымыуырға теләгән өлкән кеше уны ҡыҙ туғандарынан, ҡыҙ дуҫтарынан, хатта әсәһенән, өләсәһенән өҫтөн ҡуйырға теләй һәм бала күңеленә ошо фекерҙе һала.

Ир баланы түҙем, сыҙам, сабыр, тотанаҡлы, ниһайәт, халыҡ идеалындағыса, батыр итеп тәрбиәләргә теләйбеҙ икән - бик яҡшы. Тик ҡыҙҙарҙы кәмһетеү иҫәбенә генә булмаһын. Тамсы тама-тама таш тишә, ти. Илаҡ ҡыҙҙар менән туҡтауһыҙ сағыштырыу ҡатын-ҡыҙға- әсәһенә, ҡатынына ҡарата ҡатын-ҡыҙ ирҙәргә ҡарағанда ҡайтыш тигән фекер һаласаҡ. Был иһә яҡшы сифат түгел. Ир балала бәләкәйҙән үк ҡатын-ҡыҙға ҡарата ихтирам кәмей. Аҙаҡ ихтирамды байрамдарҙа сәскә бүләк иттереү, ашағандан һуң рәхмәт әйтергә өйрәтеү менән генә тәрбиәләп булмаясаҡ.

Ғөмүмән, балала ниндәй генә яҡшы сифат тәрбиәләйем тиһәң дә, был тәрбиә кемделер икенсе берәүҙе кәмһетеү иҫәбенә алып барылырға тейеш түгел. Был ысулдың эҙемтәләре йылдар үткәс, үҙен һиҙҙерә башлай һәм атай-әсәйҙе "Аһ!" тип үкенеү кимәленә төшөрә.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабы бына шулай аҡрынлап яҙыла. Мәрйәм апай Бураҡаеваның яҙғандарына башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсобөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ТАУҘАР ЕРҘЕ ТОТОП ТОРА... ирҙәр илде ҡотайта

- Яҡшы менән яманды бергә ҡушып болғама, боламыҡ ҡына болғағанды ярата.
- Сәфәргә юлланһаң, ил өҫтөнә бәлә һалма: кәрәк-ярағыңды теүәлләп сыҡ.
- Күп һелтәһәң хәмер, ҡәбереҥ булһын әҙер.
- Эскән кеше - һулыған гөл.
- Ер батҡағын йыуып була, хәмерҙекен- һис ҡасан.
- Эскесе йорто - тамуҡ уты, айыҡтыҡы - йәннәт мөйөшө.
- Ҡазаның да ҡазаһы, язаның да язаһы - эскелек.
- Эске тейә теңкәгә, эсмәҫ инең - һатыусылар яҙып бирә елкәгә.
- Хәмер алһаң, һатыусыға һин "Алла", алмаһаң - ҡара шайтан, кем булыуҙы үҙең һайла.
- Тауҙар -ерҙе ныҡ тотоп тороусы алтын сөй, ысын ирҙәр ил ҡотайтыусы ҡотлояр.
- Эшлекһеҙҙәр өй беренсә аш эҙләр, егәрләләр кәсеп итеп аҡса эшләр.
- Мәмәйең булһа - һөймәгә, мәмәйең бөтһә - типмәгә.
- Кешене бер шатландырып көлдөрөү - бер ҡаҙан һимеҙ аш ейҙереүгә тиң.
- Буш барабан һуғыуҙан көй сыҡмаҫ, күп һүҙ сәйнәүҙән сүбәк булмаҫ.
- Толдарға ярҙам итеү хаж ҡылыуға, етемдәргә изгелек ҡылыу сүлдә сарсаған дөйәне һуғарыу менән бер.
- Уллы кеше - ыулы, ҡыҙлылар ҡуҙлы.
- Төймәләй эшенә дөйәләй хаҡ һорама - күстәге эре ҡортҡа әйләнерһең.
- Телеҥ кӱберәк ял итһен, ҡулдарың эшләһен - донъяң бөтөн, күңелең тыныс булыр.
- Һәр эшенә күкрәк һуҡма, күкрәк тә таш түгел, селпәрәмә килер.
- Балаһыҙҙы яңғыҙлыҡ ҡаяуы бер саҡһа, балалыға бала һанынса ҡаҙала.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

**Был һүҙ-атамалар тарихи сығанаҡтарҙа, халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш осраһа ла, уларҙың социаль-ижтимағи мәғәнәһе һәм функциялары фәнни яҡтан махсус өйрәнелгәне юҡ тиерлек. Абыз һүҙен хәҙерге уҡыусы бик тиҙ генә аңлап та бармай. Кем ул абыз? Ниндәй мәғәнәгә эйә? Ҡайһы замандарҙа ҡулланылған был һүҙ?**

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ



Мәҫәлән, XIX быуат уртаһында Өфөлә яҙып алынған "Буҙъегет" ҡиссаһында шундай юлдарҙы уҡыйбыҙ:

Өй эсендә бер абыз ултыра икән,
Кереп өйгә бер сәләм бирҙе, тине,
Абыз тороп сәләм алды, тине,
Быларҙы күреп таңға ҡалды, тине.

Йәки үткән быуат башында шағир Шәйехзада Бабич "Башҡорт халҡына көйлө хитап" тигән әҫәрендә былай ти:

Беҙҙең абыз Аҡай, Салауаттар,
Ҡараһаҡал, Айҙар, Күсемдәр -
Былар бары ла ҡара көскә ҡаршы
Һуғышып үлгән алтын исемдәр!

XVIII быуатҡа ҡараған тарихи документтарҙа абыз һүҙе ҡушып әйтелгән кеше исемдәренә йыш ҡына тап булабыҙ. Шулар араһында Килмәк абыз, Кинйә абыз кеүек атаҡлы тарихи шәхестәребеҙ исемен күрәбеҙ.

Башҡортостандың ауыл, ер-һыу атамаларына күҙ һалһаҡ, Килкә Абыз, Иҫке Абыз, Ҡара Абыз кеүек ауыл исемдәрен, Абыз, Абызай, Абыздар тауы һымаҡ күл, тау атамаларын табабыҙ. Кисәге-бөгөнгө тормошобоҙҙоң үҙенә килһәк, туған-тыумасалыҡ мөнәсәбәттәрендә һирәгерәк булһа ла ололар телендә абыз ағай, абыз апай, абыз бабай, абыз әбей ише һүҙҙәрҙе ишеткеләйбеҙ.

Быларҙан күренеүенсә, абыз һүҙенә төрлөрәк мәғәнә һалынғанлығы абайлана. Ғөмүмән, абыз тигәндә - уҡымышлы кеше, фәләнсә абыз тигәндә - дәрәжәле шәхес, ауыл, ер-һыу атамаларына шундай шәхестәрҙән күскән исем, ә абыз ағай, абыз бабай тип әйтеүҙәрҙә өлкәнерәк, абруйлыраҡ мәғәнәләре аңлашыла. Хәҙер тарихи һүҙ булып яҙма әҙәбиәттә һирәк ҡулланылған абыз һүҙе башлыса әүәлге иҫке белемле, уҡымышлы кеше, тигән уртаҡ төшөнсәне бирә. "Башҡорт теленең һүҙлеге"ндә "абыз - иҫке, уҡымышлы, белемле кеше", тип кенә аңлатыла.

Ғәмәлдә, "абыз" атамаһы боронғо һүҙ булып, төрлө быуаттар һуҙымында мәғәнәһе берсә киңәйеп, берсә тарайып, хатта танымаҫлыҡ булып үҙгәреп киткән. Боронғо төрки телендә абыз тип иң уҡымышлы, ғалим кешегә әйтер булғандар. Ҡаҙаҡ халҡында абыз тип Кесе Урҙалағы табын ырыуының бер аймағын атағандар. Аҙағыраҡ был һүҙҙе ислам динен, Ҡөрьәнде яҡшы белгән Ҡөрьән-хафиз кешегә ҡарата ҡулланғандар. Шиһабетдин Мәржәни абыз һүҙенең сығанағын ана шул ғәрәп һүҙе хафиз менән бәйләй. Төрки телдәренең сағыштырма һүҙлеген төҙөгән рус лексикографы Л. З. Будагов та абыздың хафиз мәғәнәһендә генә ҡулланылған был һүҙ халыҡ телендә абыз рәүешендә үҙгәреп, мәғәнәһе лә уҡымышлы, белемле кеше төшөнсәһен алып киңәйеп киткәнен, тел ғилемендә ҡайһы бер өндәрҙең төшөп ҡалыу ҡанунын таный.

XIX быуатта Л. З. Будагов, В. В. Радлов тарафынан сығарылған төрки һүҙлектәрендә "абыз" һүҙенә "уҡымышлы, белемле кеше" мәғәнәһендә аңлатма бирелә. Тимәк, абыз һүҙе мулла, мөҙәрис атамалары кеүек дин шөғөлө менән бәйле тар мәғәнәләге төшөнсә түгел, бәлки уҡымышлылыҡтың донъяуи мәғәнәһен дә үҙ эсенә алған киң төшөнсәле атама. XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттар халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған иң абруйлы, иң белемле кешеләрҙе генә абыз тип атаған. Ундай абыздар ырыу-йорт мәнфәғәтен яҡлап йыйындарҙа сығыш яһар, йәмәғәт ихтыяждары, талаптары хаҡында ҙур түрәләргә хаттар, шикәйәттәр яҙыр, волостарҙа, өйәҙҙәрҙә писарь йә тылмас (тәржемәсе) вазифаһын да башҡарыр, мөғәллимлек итер булғандар.

VI-XI быуаттарҙағы төрки тел, ташъяҙма, ҡулъяҙма төрки тел һүҙҙәрендә абыз һүҙе осрамай. Тимәк, ул заманда телдә һәм яҙмала ул һүҙ ҡулланылышта булмаған. "Хафиз" һүҙе лә боронғо төркиҙәрҙә юҡ. Күрәһең, боронғо төркиҙәргә "Ҡөрьән хафиз", "хафиз", аҙаҡ "абыз" атамалары ислам динен ныҡлап ингәндән һуң, XIII-XIV быуаттарҙа ғына тамыр йәйеп, телдә баҙыҡланып киткән. Борон ҡамдар, ҡанбабалар, бейҙәр йәмғиәт тормошонда мөһим урын тотһа, һуңыраҡ әле атаған быуаттарҙа башҡорт йәмғиәтендә, дини, рухани донъяла, ырыу-ил эштәрендә аҡһаҡаллыҡ йәмәғәт институты, улар араһынан абызсылыҡ эшмәкәрлеге алға сыҡҡан булһа кәрәк. Абыздар административ даирәләрҙә, халыҡтың яҙма культураһы, ижтимағи фекер үҫеше тарихында ҙур роль үтәй башлаған.

XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттар араһында социаль, милли азатлыҡ өсөн көрәш үтә киҫкенләшеп киткән осорҙарҙа, абыздар батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәргән халыҡтың идеологтары, күп кенә ихтилалдарҙың етәкселәре булып китә. Мәҫәлән, 1735-1736 йылдарҙағы күтәрелештең башлығы һәм батыры булып Килмәк абыз, 1737 йылғы яуҙың етәксеһе һәм идеологы булып Бәпәнәй абыз тора. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында мәшһүр Кинйә абыз Арыҫланов башҡорт халҡының ғына түгел, татар, сыуаш, мари халыҡтарының яҡын идеологы, Пугачев хәрби коллегияһының төп ағзаһы, баш атаманы булып танылла. Батыршаның да 1755 йылғы башҡорт восстаниеһын ойоштороуҙағы роле ана шул абызсылыҡ эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Халыҡ үҙенең Салауат Юлаев, Бәҙерғол Юнаев кеүек ғәййәр улдарына ил батыры тип дәрәжәле исемдәр ҡушһа, Ҡобағош, Ҡарас, Килдеш, Байыҡтарҙы яуға, дауға өндәр сәсәндәре тип атаһа, юғарыла исемләнгән тарихи шәхестәренә, уҡымышлы, абруйлы аҫыл заттарына, восстание етәкселәренә абыз исемен, оло дәрәжәһен шулай уҡ үҙе биргән.

XVIII быуаттың тәүге яртыһында бер-бер артлы ҡалҡҡан башҡорт яуҙарында ҡатнашҡан абыздарҙан, мәҫәлән, Рәсәй чиновниктарының тикшереү, хөкөм итеү ҡағыҙҙарына ингәндәрҙән шундай исемдәрҙе уҡыйбыҙ: Абдулла Йософов абыз, Абызгилде, Әзей абыздар, Айыткол Абыз, Әлекәй Абыз, Арыҫлан абыз Бикмәтов, Асанғол абыз, Әхмәт абыз, Аҡтай абыз, Баҡай абыз, Бәпәнәй Абыз, Исмәкәй абыз, Ҡанабей абыз Сәйетҡолов, Ҡара абыз Рәғимғолов, Ҡарағази абыз, Килмәк абыз, Ҡылы абыз, Хафизгилде абыз Ҡудашов, Йәрмөхәммәт абыз һ.б.

Бына Килмәк абыз Нурышовты алайыҡ. Ул Нуғай юлы Юрматы волосы кешеһе. Килмәк ҙур мәҙрәсә тотҡан, шуның мөҙәрисе булған шөһрәтле абыз. Башҡорт илселеге составында 1706 -1707 йылдарҙа Ҡырымда һәм Төркиәлә булған. 1735 йылда Бөтөн башҡорт ҡоролтайын ойоштороусыларҙың башлығы. Унда 1735 йылда азатлыҡ өсөн яуға күтәрелеүгә ҡарар ҡабул ителә. Үҙе аҙаҡ был 1735-1736 йылдарҙағы яу менән етәкселек итә. Оло яу башлығы һәм батыры булып дан ҡаҙана. 1737 йылда Табын ҡәлғәһендә ҡулға алына һәм Өфөгә, Минзәләгә, аҙаҡтан Санкт-Петербургка ҡаты һаҡ аҫтында оҙатыла. Артабанғы яҙмышы билдәле түгел.

Бәпәнәй абыз Төрөпбирҙин Себер юлы Ҡыуаҡан волосы башҡорто. Ул 1735 йылдан 1740 йылға тиклем бер ҡабынып, бер һүрелеп ҡалҡҡан өсдүрт ихтилалдың Себер юлындағы күтәрелештәре менән етәкселек иткән абыз. Уның атаһы Төрөпкилде һәм ҡартатайы Ҡамаҡай данлы тархандар булып, 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт восстаниелары уртаһында ҡайнаған батырҙар.

Уҡымышлы һәм абруйлы абыз булараҡ, Бәпәнәй Рәсәй хөкүмәте аппараты, Ырымбур экспедицияһы начальнигы В. Н. Татищев менән башҡорт халҡы исеменән бәйләнеш урынлаштыра, мөрәжәғәт хаттары яҙа. Был мөрәжәғәттәрендә ул, Рәсәй хөкүмәтенең башҡорттар менән төҙөгән килешеүҙе (договорҙы) боҙоуы, шул арҡала халыҡтың үҙ иркен яҡлап яуға күтәрелергә мәжбүр булыуы, Рәсәйҙән айырылып сығыу ихтималы мәсьәләһе ҡуйылыуы хаҡында ла рәсми һүҙ алып бара. 1737-1738 йылдарҙағы күтәрелештә Красноуфимск, Көңгөр, Бөрө, Уса кеүек ҡала һәм ҡәлғәләргә һөжүмдәр ойоштороуҙа, Башҡортостандың төрлө тарафтарында башланған ихтилал хәрәкәте менән тығыҙ бәйләнеш булдырыуҙа ҙур эштәр башҡара. Тимәк, башҡорттарҙың ирек, азатлыҡ өсөн көрәшен дипломатик саралар аша ла юлға һалыуға тырышлыҡ күрһәтә, улар һөҙөмтә бирмәгәс, халыҡты яуға күтәрә. Ихтилал баҫтырылғас, Бәпәнәй абыз үҙ ирке менән баш һалһа ла, уны ярлыҡамайҙар. 1739 йылда Минзәләлә аҫып үлтерелә.

Халыҡтың ирке өсөн көрәштә абызсылыҡ традицияларын 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Кинйә абыз Арыҫланов һәм уның тиҫтәләгән яу башлыҡтары ҡәләм һәм ҡорал көсө менән дә уңышлы дауам итә.

XVIII быуат аҙағында башҡорт восстаниелары тамам баҫтырылып, унда ҡатнашыусыларҙың күбеһе, яу башлыҡтары, идеологтары язаланып үлтерелгәндән йәки мәңгегә һөргөнгә ебәрелгәндән һуң, азатлыҡ көрәше тамам һүрелеп ҡала. Ил, халыҡ яҙмышына бәйле дипломатик эштәр менән шөғөлләнер, азатлыҡ көрәшен етәкләр абыздар өсөн ерлек һәм мөмкинлектәр юҡҡа сыға йә бик ныҡ тарая.

XIX быуат башынан башлап инде абыздар тип белемле һәм абруйлы үҙ кешеләрен генә ололап әйтәләр. Абыз төшөнсәһенең мәғәнәһе тора-бара тағы тарайыңҡырап, өлкән туған-тыумасаларҙы атауға, туғанлыҡ төшөнсәһен аңлатыуғаса төшә. Хәҙерге көндә башҡорттар араһында ла абыз һүҙе ҡайһы бер һөйләштәрҙә ана шул туғанлыҡ атамаһы рәүешендә таралған. Мәҫәлән, Ҡариҙел, Танып буйы башҡорттары, ғәйнә башҡорттары атаһының ағаһын абыз бабай, атаһының апаһын абыз әбей, оло ҡатын-ҡыҙҙы ололап абыз әней тип йөрөтә. Абыз ағай һүҙен ҡыҫҡартып әйтеүҙән абызый, абыз түтәй һүҙен ҡыҫҡартыуҙан абыстай һүҙе нығынып киткән.

Л. З. Будаговтың 1869 йылда сыҡҡан төрки телдәренең сағыштырма һүҙлегенә ҡарағанда, башҡорттарҙа әсә кешене абыз әсә, абызасә тип исемләү ҙә булған икән. Был һүҙлек буйынса, башҡорттарҙа уҡыу, белем алыу мәғәнәһендә абызламаҡ, абыз итмәк һүҙе лә ҡулланылған. Ғилемле, культуралы кешене абыз кеше тип атау ҙа йәшәй оло йәштәгеләр телендә. Хәҙерге беҙҙең әҙәби телебеҙҙә лә абыз һүҙе ана шул белемле, уҡымышлы кеше мәғәнәһендә һаҡланып ҡалған.

Йыйып әйткәндә, абыз атамаһы тәүҙә "Ҡөрьән"де яттан белгән Ҡөрьән-хафиз исеменән әйтелеш рәүеше үҙгәргән абыз һүҙенә әүерелгән. Ул инде урта быуаттарҙа дини белемле, ғилеме менән ил-йәмәғәт тормошонда ҙур урын тотҡан ил ағаһы, йәмәғәт эшмәкәре һәм абруйлы аҡыл эйәһе дәрәжәһен аңлатҡан исемгә әйләнгән. Башҡорт милли хәрәкәттәре, ихтилалдар дәүерендә яу, дау башлыҡтары, илселек вазифаларын үтәр ил азаматтары булып киткән. Был дәүерҙәге абыздар йәмғиәт фекерен ойоштороусы һәм формалаштырыусы, ижтимағи фекер, хикмәт эйәләре кимәлендә йөрөй.

XVIII быуат һуҙымында абыздар батша хөкүмәте тарафынан аяуһыҙ эҙәрлекләнә һәм хөкөм ителә, язалана башлағас, был абызсылыҡ йәмғиәт институты тарҡалған. XIX быуатта инде абыз атамаһы туған-тыумаса араһында оло һәм абруйлыраҡ кешене ололап әйтер төшөнсә кимәленә төшөп ҡалған (абыз ағай, абыз апай, абызый, абыстай һ. б.). Тарихи атамалар, дәрәжә-исемдәр ҙә шулай төрлө дүнештәргә дусар була икән.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**яҙыусы, профессор.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Ғөмүмән, тормош юлым һәр ваҡыт Зәки Вәлиди шәхесе менән үрелеп барҙы, тиһәм дә дөрөҫ булыр. Хатта улым тыуғас: "Әхәт уға Әхмәтзәки тип исем ҡуша инде", - тип тә шаяртҡыланылар.***



**Күгәрсен районының Бикеш ауылында тыуған бөгөнгө монолог геройы Әхәт Сәлиховты хәҙер шулай "Донъя кешеһе, тыныслыҡ кешеһе" тип атарға ла мөмкиндер. Сөнки уның тыуған ере Башҡортостан булһа, эше буйынса ул төрки халыҡтары йәшәгән дәүләттәрҙең барыһында ла үҙ кеше, һәр ерҙә үҙен тыныс һәм ышаныслы тоя. Һүҙҙең кем хаҡында барасағын аңламаусылар булһа, саҡ ҡына аңлатма биреп китәйем - Әхәт Ғөбәй улы бөгөн Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ-ара төрки телле мәҙәниәттәр ойошмаһы - ТӨРКСОЙ вәкиле. Шуға ла уға ҡитғаның төрлө мөйөштәрендә, төбәктәрендә булырға тура килә. Хәйер, белеме буйынса тарихсы кешегә был үҙе Аллаһы Тәғәләнең ҙур бүләгелер ҙә. Мөмкинлеген тулыһынса файҙаланып ҡалырға тырыша яҡташыбыҙ: фән менән дә шөғөлләнергә онотмай, сит яҡтарҙа йәшәгән башҡорттар менән ҡыҙыҡһынып, улар тураһында материалдар ҙа йыя. Ә шулай ҙа тарих нисегерәк башланды икән, әйҙәгеҙ, уның үҙен тыңлайыҡ.**

# ДОНЪЯ КЕШЕҺЕ, ТЫНЫСЛЫҠ
## төрки халыҡтары йәшәгән

### Картуф утаған бала саҡ

Бөтә ғүмерен механизатор һөнәренә бағышлап, утын яғып йөрөтөлгән тракторҙарҙан алып замансаһына тиклем эшләгән, хеҙмәте миҙалдар һәм маҡтау ҡағыҙҙары менән баһаланған атайлы, һатыусы булып, көнкүреш хеҙмәте өлкәһендә шулай уҡ маҡтау грамоталары алған әсәйле ябай ғаиләлә үҫтем. Беҙҙе, балаларын, тәрбиәләүҙә әсәйемдең роле бик ҙур. Ғөмүмән, үҙҙәре юғары белем ала алмағанғамы, атай-әсәй беҙҙе һәр саҡ "Уҡығыҙ, уҡығыҙ", тип торҙо. Мәктәптә атай-әсәй һалған бурысты аҡларға тырышып уҡылды, шул саҡта уҡ тарих үҙенә нығыраҡ ылыҡтырҙы. Баҡсала картуф ултыртҡанда, утағанда, ҡаҙғанда ниндәй боронғо әйберҙәр табыла, гел йыйып йөрөй торғайным. Был шөғөлөмдө белеп ҡалғас, ауылдаштарым кем нимә таба, барыһын да миңә килтерә ине. Әле лә бөтөн ошо байлыҡ ауылда һаҡлана. Мөмкинлек булыу менән фатирымда бер бүлмәне шәхси музей итеп йыһазландырыу тураһында хыялланам.

### Китап "ене" ҡағылғас

Икенсе шөғөлөм - китап уҡыу булды. "Ағиҙел" журналында Ғәли Ишбулатовтың ғәрәп графикалы "Әлифба"һы донъя күргәс, уның буйынса үҙ аллы уҡырға өйрәндем. Уны тулыһынса дәфтәргә күсереп алдым да, уҡый, яҙа башланым. Журналда яҙылғандарҙы яҡшы үҙләштерҙем. Шунан ауылда Хафиза исемле инәйҙең ғәрәп графикаһында яҙылған китаптарын алып уҡып ҡараным. Уҡыуы ауырыраҡ булды. Аҙаҡ бер сама ваҡыт үткәс, уҡыу һәләтем асылды ла китте. Төрки телле ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙмаларҙы, китаптарҙы уҡый башланым.

Мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инеп ҡараным, әммә конкурстан үтә алманым. Яҙмышҡа яҙғаны шулдыр, тип, әрме хеҙмәтенә барып, тыуған ил алдындағы бурысымды атайым да хеҙмәт иткән Сахалин утрауында 2 йыл үтәп ҡайтҡас, ауылда эш башланым. Үҙемсә яҡшы эшләгән кеүекмен, ҡәнәғәтмен. Әсәй генә бер туҡтауһыҙ, юғары белем ал, тип тылҡый. Шулай итеп, күндерҙе. Был юлы Өфөгә барманым, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының тарих факультеты студенты булып киттем.

Шулай Стәрлетамаҡта белем эстәп йөрөгәндә китапханалағы күргәҙмәлә Миҙхәт Мәмбәтов менән таныштым. Ул параллель факультетта фольклорҙан уҡыта ине. Уны фольклорсы тип белә инем. Минең боронғо китаптар менән ҡыҙыҡһыныуым, боронғо яҙыуҙы уҡый белеүем тураһында ишеткәс, "Берәй ял Өфөгә барырға тура килһә, Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары менән таныштырырмын", - тине. Вәғәҙә - иман, күп тә үтмәй, Миҙхәт Әхмәтхан улы мине Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Зиннур Ураҡсин һ.б. менән таныштырҙы. Алға китеп шуны әйтә алам, уҡыуҙы тамамлау менән мине, боронғо яҙыуҙарҙы уҡый белгәс, Өфөгә стажер итеп алдылар.

### Тормошҡа үрелгән яҙмыш

Институтта уҡығанда Зәки Вәлиди тураһында, уның үҙенең революцияға тиклемге әҫәрҙәрен уҡып, диплом эшен "Зәки Вәлидиҙең революцияға тиклемге ғилми эшмәкәрлеге" тигән темаға яҙҙым. Ҡайҙан, кемдән боронғо китаптар табам, шуларҙы уҡыйым, улар араһында Зәки Вәлидовтың китаптарының өҙөктәре лә килеп сыҡҡыланы. Бер ҡоҙамдың шәхси китапханаһында Зәки Вәлидиҙең китаптарына тап булдым. Уларҙы алып уҡып сыҡтым. Бер саҡ "Шура" журналын уҡып ултырғанда З. Вәлидовтың мәҡәләләре, бәләкәй генә хаттары килеп сыҡҡас, хайран ҡалдым. Бөйөк ғалим хаҡында, уның революцияға тиклем яҙғандары тураһында аҙ-маҙ ишетһәк тә, тулы мәғлүмәт етешмәй ине. Уны беҙгә милләтсе тип һөйләнеләр бит инде. Әммә шулай ҙа уның Төркиәлә йәшәүе, профессор булыуы хаҡында яҙа-йоҙа ишетеп белә инек. Һуңынан танылған ғалим булыуы хаҡында тулыһынса хәбәрҙар булдыҡ. Ғөмүмән, тормош юлым һәр ваҡыт Зәки Вәлиди шәхесе менән үрелеп барҙы, тиһәм дә дөрөҫ булыр. Хатта улым тыуғас: "Әхәт уға Әхмәтзәки тип исем ҡуша инде", - тип тә шаяртҡыланылар.

### Тел Киевҡа ғына еткермәй…

Өфөлә боронғо ҡулъяҙмалар фондында эшләп йөрөгәндә БГПИ-ға төрөк телен уҡытырға уҡытыусылар килде. Фирҙәүес Хисамитдинова декан ине ул ваҡытта. Ул Маргарет Эрсен Раш менән Хәйретдин Сейхан тигән уҡытыусыларҙы саҡырғайны. Мин дә уларҙың дәрестәренә йөрөргә рөхсәт һораным һәм теләгем ҡабул булды. Эшемдән дә ҡаршы булманылар. Шулай бер айлыҡ тәрәнәйтелгән курстарҙы тамамлап, диплом алдым. Үҙем дә төрөк телен аҙ-маҙ һүҙлек аша өйрәнә инем быға са, шуға дәрестәр еңел бирелде. Төрөк телендә Зәки Вәлидиҙең китаптарын уҡый алғас, киләсәктә Төркиәгә барып, уның ғилми мираҫын өйрәнер инем, тигән өмөт барлыҡҡа килде. 1993 йылда Башҡортостанға Төркиәнән ҙур делегация килде. Шунда Зәки Вәлидиҙең балдыҙы Гөлчин Чандарлыолы менән таныштым. Уның менән аралашып киттек, уға үҙемдең хыялым тураһында ла әйттем. Делегация ҡайтып китеп, бер аҙ торғас, миңә саҡырыу килеп төштө. Шулай Төркиәгә барып әләктем һәм Истамбулда Мимар-Синан университетының тарих, фән, әҙәбиәт факультетында магистратурала уҡыным. Гөлчин Чандарлыолы ла уҡытты мине, тик ул Ҡаҙағстанға Йәсәүи университетына Төркиә яғынан ректор булып киткәс, диплом эшен уның уҡыусыһына яҙып, уҡыуымды тамамланым. Диплом эшем Зәки Вәлидиҙең тарихи мираҫына арналғайны. Бер үк ваҡытта Зәки Вәлидиҙең революцияға тиклемге мираҫын башҡортсаға тәржемә иттем, ул китап булып баҫылып та сыҡты. Уҡыуымды тамамлап ҡайтҡас, БФАН-да туғыҙ йыл ғилми секретарь булып эшләнем, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булараҡ та эшмәкәрлегемде дауам иттем. Тарих буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланым.

### Халыҡ-ара аренаға трамплин

ТӨРКСОЙ-ға китеү ҡапыл килеп сыҡты. Мине бер нисә кандидатура араһынан һайлап алдылар. ТӨРКСОЙ төрки халыҡтары мәҙәниәтен, сәнғәтен, әҙәбиәтен танытыу йәһәтенән ҙур эштәр башҡара. Ойошма, мәҫәлән, "Урал батыр" эпосын, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мәжит Ғафури әҫәрҙәрен, "Башҡорт шәжәрәләре", "Башҡортса-төрөксә һөйләшеү һүҙлеге" китаптарын, "Башҡортостан - Евразияның ынйыһы" фотоальбомын нәшер итте. Шундай китаптар аша башҡа халыҡтар башҡорт халҡының рухи мираҫы менән танышты.

Икенсенән, төрлө фестивалдәр аша Башҡортостан сәнғәтен пропагандалау айырым баһаға лайыҡ. ТӨРКСОЙ сәнғәт буйынса симпозиумдар үткәрә, рәссамдар, фотограф-



***Зәки Вәлидиҙең төрки халыҡтары мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеүҙәге әһәмиәтле ҡаҙаныштарын иҫәпкә алып, ойошма 2010 йылды Зәки Вәлиди Туған йылы тип иғлан итте. Әйтергә кәрәк, йылды шәхес исем-шәрифе менән атау ТӨРКСОЙ тарихында беренсе тапҡыр булды.***
***2010 йылдың 26 августа Анкараның Кечиорен районында Зәки Вәлиди Туған исемендәге парк асылды, 21 сентябрҙә Тарсус ҡалаһында бер урамға Зәки Вәлиди исеме бирелде. Октябрҙә иһә Айфон ҡалаһының Коджатепе университетында "Әхмәтзәки Вәлиди Туған һәм төрки мәҙәниәте" тип аталған ғилми симпозиум үткәрелде. Унда Азия илдәренән, Ҡытайҙан, Япониянан, Тайвандән, Монголиянан һәм Рәсәйҙән 130 ғалим ҡатнашты. Украинаның Симферополь һәм Баҡсаһарай, Төркиәнең Ялова ҡалаларында халыҡ-ара конференция, "түңәрәк өҫтәл", семинарҙар ойоштоторолдо.***

*✓ Төрки дәүләттәре халҡы Зәки Вәлидовтың шәхесен ихтирам итә, бөйөк ғалим итеп ҡарай, уның аша беҙҙе, башҡорттарҙы таный. Сөнки беренсе булып үҙенең дәүләтселеген булдырған кешегә, уның милләттәштәренә ыңғай ҡарамау мөмкин түгел.*



# КЕШЕҺЕ,

## төбәктәрҙең үҙ кешеһе

тар, әҙәбиәтселәр, тәржемәселәр, кинематографистар араһында ижади лабораториялар ойоштора, театрҙар араһында репертуар алмашыу буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла. Хәҙер шағирҙарға төрөк телен өйрәтеү курстары асылды. Күптән түгел Ғази университетында төрлө төбәктән килгән биш шағир, шул иҫәптән Башҡортостандан Лилиә Ҡәйепова, төрөк телен өйрәнеү курстарында шөғөлләнде.

Беҙҙең ойошма ярҙамы менән Стәрлетамаҡ педакадемияһы һәм Анкараның 70 мең студент уҡыған Ғази университеты араһында бәйләнеш булдырылды. Ғази университетында башҡорт, рус телдәрен өйрәнәләр. Ә республикабыҙ студенттарына бындай аралашыу Төркиәнең мәҙәниәтен һәм телен өйрәнеү мөмкинлеге бирә.

Йыл һайын ойошторолған Науруз байрамында төрки халыҡтары йәшәгән илдәрҙән дә делегациялар ҡатнаша. Былтыр беренсе тапҡыр был байрам Парижда, ЮНЕСКОның штаб-квартираһында үтте, уны ЮНЕСКО, иң матур байрам, тип баһаланы. Быйыл был тантананы Нью-Йоркта, БМО-ның штаб-квартираһында, шулай уҡ Вашингтонда үткәрҙек. Унда Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле һәм Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солистары ҡатнашты. Мәғлүм булыуынса, хәҙер Науруз байрамы ЮНЕСКО-ның исемлегенә инде. ТӨРКСОЙ-ҙың да донъяның матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлеген булдырыу өҫтөндә эш алып барыла. Башҡортостандан, мәҫәлән, "Урал батыр" эпосы, ҡурай милли инструменты, һабантуй кеүек байрамдар ЮНЕСКО-ның исемлегенә инмәһә, уларҙы ТӨРКСОЙ-ҙыҡына индереү тураһында проект әҙерләнде.

## Төрки донъяһы һәм Зәки Вәлиди

Билдәле немец ғалимы П. Каале, 1937 йылда бөтөн донъяла билдәле рус профессоры Бартольд үлгәндән һуң профессор Зәки Вәлиди Үҙәк Азия тарихы һәм географияһы буйынса иң киткес белеме менән был өлкәлә тере корифей булып тора, тигән. Ысынлап та, күпме төрки дәүләттәрендә булырға тура килде, уларҙың барыһында ла Зәки Вәлиди аша башҡорттарҙы ихтирам итәләр. Бөйөк шәхесте ололайҙар, уны хөрмәт менән иҫкә алалар һәм исемен мәңгеләштерәләр. Тәүгеләрҙән булып Үзбәкстанда Зәки Вәлиди проспекты барлыҡҡа килде. 2008 йылда Санкт-Петербург дәүләт университетының көнсығыш факультетында уның бюсы ҡуйылды һәм З. Вәлиди исемен йөрөткән Төрки тикшеренеүҙәре үҙәге асылды.

ТӨРКСОЙ һәр ваҡыт билдәле төркиәтселәрҙең ғилми мираҫын өйрәнеүгә һәм популярлаштырыуға етди иғтибар бирә. Зәки Вәлидиҙең төрки халыҡтары мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеүҙәге әһәмиәтле ҡаҙаныштарын иҫәпкә алып, ойошма 2010 йылды Зәки Вәлиди Туған йылы тип иғлан итте. Әйтергә кәрәк, йылды шәхес исем-шәрифе менән атау ТӨРКСОЙ тарихында беренсе тапҡыр булды. Был йылда ойошма төрки халыҡтары йәшәгән илдәрҙә арҙаҡлы яҡташыбыҙға, милләттәшебеҙгә арналған төрлө саралар уҙғарҙы. Бөйөк шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара конференциялар Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһында, унан һуң Әзербайжанда үтте, йыл дауамында тағы ла Төркиәнең Анкара, Истамбул ҡалаларында ойошторолдо. Былтыр йәйгеһен ошо йыл сиктәрендә Башҡортостанда фоторәссамдарҙың ижади лабораторияһы уҙғарылды. Рәссамдар Башҡортостан райондарында булды, төрлө иҫтәлекле урындарҙы фотоға төшөрөп мәңгеләштерҙе, ошо ваҡытта уҙғарылған төрлө сараларҙа ҡатнашты, күргәҙмә ойошторҙо.

2010 йылдың 26 авгусында Анкараның Кечиорен районында Зәки Вәлиди Туған исемендәге парк асылды, 21 сентябрҙә Тарсус ҡалаһында бер урамға Зәки Вәлиди исеме бирелде. Октябрҙә иһә Айфон ҡалаһының Коджатепе университетында "Әхмәтзәки Вәлиди Туған һәм төрки мәҙәниәте" тип аталған ғилми симпозиум үткәрелде. Унда Азия илдәренән, Ҡытайҙан, Японианан, Тайвандән, Монголиянан һәм Рәсәйҙән 130 ғалим ҡатнашты. Украинаның Симферополь һәм Баҡсаһарай, Төркиәнең Ялова ҡалаларында халыҡ-ара конференция, "түңәрәк өҫтәл", семинарҙар ойошторолдо. Шулай уҡ Төркиә тарих йәмғиәте ойошторған "түңәрәк өҫтәл" дә был саралар исемлегендә әһәмиәтле урын алып торҙо. Сөнки уның сиктәрендә 1951 йылда донъя күргән Көнсығышты өйрәнеүселәрҙең XXII халыҡ-ара конгресы материалдары Зәки Вәлиди Туғанға арналып, ҡайтанан нәшер ителде. Ярты быуаттан ашыу элек булған ҙур сара тап беҙҙең милләттәшебеҙҙең рәйеслегендә үтә. Сараларҙы йомғаҡлау быйыл Башҡортостанда тамамланып ҡуйҙы. Ошо ваҡиғалар сылбырын һанап, нимә әйтергә теләйем - төрки дәүләттәре халҡы Зәки Вәлидовтың шәхесен ихтирам итә, бөйөк ғалим итеп ҡарай, уның аша беҙҙе, башҡорттарҙы таный. Сөнки беренсе булып үҙенең дәүләтселеген булдырған кешегә, уның милләттәштәренә ыңғай ҡарамау мөмкин түгел.

## Ғаиләм- ҡәлғәм

Әлеге ваҡытта беҙ үҙебеҙҙе шаартып "виртуаль ғаилә" тип йөрөтәбеҙ. Сөнки айҙар һуҙымында Төркиәлә эшләгәндә ғаиләм менән көн һайын виртуаль донъяла - интернетта аська, скайп аша аралашабыҙ. Әлбиттә, ҡыҙым Асия эргәһендә күберәк булдым, ә бына бәләкәсемдә, Азамат улымды, һирәк күрәм. Барыбер ҙа ул мине һағынып, минең өсөн өҙөлөп тора. Бында, әлбиттә, ҡатыным Сәриәнең тәрбиәһе ҙур роль уйнай. Әгәр беҙ күпмелер ваҡытҡа айырым йәшәйбеҙ икән, тимәк, бер-беребеҙгә ышанабыҙ. Ир менән ҡатындың үҙ-ара мөнәсәбәтен ошо айырылышып тороу һынай ҙа инде. Был хәлдең ваҡытлыса икәнен балаларға ла аңлатабыҙ. Башҡортостанға ялға тип ҡайтам да, барыбер эш артынан сапҡыларға тура килә, балалар мине өйҙә генә тотҡоһо килә лә, барып сыҡмай.

Хәҙер иҡтисади шарттар ныҡ үҙгәрҙе. Тыуған ерендә йәшәйем тиеүселәр ҙә ғаиләһен тәьмин итер өсөн айлап Себергәме, ҡайҙалыр китеп эшләй. Шуға ситтә эшләүемә ыңғай ҡарайым, мөмкин тиклем йышыраҡ ҡайтырға тырышам. Ғаиләмде Төркиәгә алып барып ҡарағайным да, әммә мин көнө буйы эштә, улар көнө буйы өйҙә ултыра. Шуға уларға Башҡортостанда йәшәүе унайлыраҡ булыр тигән ҡарарға килдек. Бында балалар әүҙем тормош менән йәшәй. Теләһәләр - ауылға ҡайталар, теләһәләр - ниндәйҙер түңәрәктә шөғөлләнәләр. Үҙ мөхитендә, үҙ ерендә, үҙ телендә аралашып үҫәләр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй, ир-егеткәй менән ат башы", тип йырлана халыҡ йырында. Был йыл ижад ителгән ваҡытта сит-ят ерҙә йөрөү мәжбүри булһа, хәҙер инде кешенең белем кимәле, илдең иҡтисади торошо уны сит тарафтарға алып китә. Әммә ниндәй генә сәбәптәр тапһаҡ та, был тормошта маҡсатына ынтылыусылар һәр ерҙә үҙ урынын таба. Ул ғына ла түгел, республиканың, халҡының мәртәбәһен арттырыуға ҙур өлөш индерә. Был - иң мөһиме.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ЗАМАНСА ҺӨНӘРҘӘРГӘ...

## Учалыла ла уҡыталар

**Былтыр Башҡорт дәүләт университеты ойошторолоуға 100 йыл тулһа, уның Учалылағы филиалы 10 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ул факультет булып 1999 йылда асылғайны. Бөгөн унда "Милли иҡтисад" һәм "Филология" һөнәрҙәре буйынса белем бирелә. Филология һөнәрен үҙләштергән студенттар башҡорт-рус һәм башҡорт-инглиз йүнәлештәрен һайлау мөмкинлегенә эйә. Учалы районы студенттарынан тыш, бында Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ, Дүртөйлө, Дыуан, Мәсетле, Ҡариҙел, Күгәрсен, Салауат, Федоровка райондарынан, шулай уҡ Ҡурған, Силәбе өлкәләренән килеп уҡыйҙар.**

Студенттар был уҡыу йортонда өҫтәмә һөнәрҙәр ҙә үҙләштерә. Уларға диплом менән бергә өҫтәмә белем алыуҙары тураһында сертификат тапшырыла. Хореограф Зөлхизә Ҡолбәитоваға йөрөгән студенттар оҫта бейергә өйрәнә. Уҡыу йортонда "Яйыҡ" халыҡ бейеү ансамбле булдырылған. Учалы яҙыусылар ойошмаһының әҙәби консультанты Байгилде Янбулатов етәкселегендә буласаҡ филологтар журналистика өлкәһендә ҡәләм шымарта, тәүге әҙәби әҫәрҙәрен тыуҙыра. Яңыраҡ ҡына III курс студенты Розалиә Ҡыуандыҡованың тәүге шиғри йыйынтығы донъя күрҙе. Инглиз телен төплөрәк өйрәнергә теләүселәр өсөн өҫтәмә курстар булдырыу планлаштырыла. Шулай уҡ филиалда төрлө түңәрәктәр эшләп килә. Азамат Ямалетдинов ҡурай түңәрәген алып бара. Халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн дә айырым сәғәттәр бүленгән. Ҡыҙҙарға "Һылыуҡай" студияһына йөрөү мөмкинлеге бар.

Учалы филиалын тамамлағандар араһында генераль директор вазифаһын биләгәндәр ҙә, Мәскәү, Санкт-Петербург, башҡа ҙур ҡалаларҙың предприятие, фирмаларында, Учалы тау-байыҡтырыу комбинатында, банкыларҙа эшләп йөрөгәндәр ҙә, үҙ эшен асҡан эшҡыуарҙар, фән юлынан китеүселәр ҙә байтаҡ ҡына. Уҡыу йортоноң тәүге аспиранттары бөгөн кандидатлыҡ диссертацияларын яҡларға тора. Был күрһәткестәрҙең барыһы ла филиалда төплө һәм сифатлы белем бирелеүе, уҡытыусыларҙың һөнәри кимәле юғары булыуы хаҡында һөйләй. Бында уҡырға ингән студенттың һәр береһе иғтибар үҙәгендә, һәр береһенә индивидуаль ҡараш һәм мөнәсәбәт булдырыла. Башҡа юғары уҡыу йорттарынан айырмалы рәүештә, студенттан уҡыу процесына яуаплылыҡ, атап әйткәндә, лекцияларҙы ҡалдырмауы ҡаты талап ителә. Студенттарҙың тәртибен, мәҙәнилеген үҫтереүгә айырым иғтибар ителә. Йәштәр уҡыу йортонда ғына түгел, ә башҡа урындарҙа ла үҙҙәрен тәртипле тоторға, мәҙәниәтле булырға өйрәнә.

- Икенсе йылға геология, информатика, экология һөнәрҙәре буйынса бүлектәр асыу планлаштырылған. Киләсәктә районда туристик бизнестың үҫеү ихтималлығын иҫәпкә алып, ошо йүнәлеш менән бәйле һөнәрҙәр буйынса белем биреү ниәте бар, - тине БДУ-ның Учалы филиалы директоры, филология фәндәре кандидаты, доцент Зилә Рәхмәтуллина.

Физика-математика фәндәре кандидаты, доцент Рузель Сафиуллин уҡытыласаҡ информатика һәм геология һөнәрҙәре тураһында тулыраҡ мәғлүмәт биреп үтте.

- Ғәмәли информатика һөнәре информатиканы һәм компьютер белеме кәрәк булған өлкәләрҙә: иҡтисад, менеджмент, психология, дизайн, юриспруденция, технологияны үҙ эсенә ала. Ғәмәли информатиканы һайлаған студент бер юлы ике һөнәргә эйә була, тигән һүҙ. Бында информатика һәм программалаштырыу, юғары математика, информатик хәүефһеҙлек кеүек фәндәр уҡытыла. Иҡтисад өлкәһендәге ғәмәли информатика банк, таможня эшендә, бухгалтерияла һәм башҡаларҙа ҡулланыла, айырым махсус компьютер программалары менән дә эшләү күҙ уңында тотола. Менеджмент өлкәһе иһә һатыу эштәре, реклама менән бәйле. Ғәмәли информатиканың ҡалған өлкәләре шулай уҡ айырым компьютер программалаштырыу үҙенсәлектәренән ғибәрәт. Студенттар бында программист һөнәренә эйә булып сығалар.

Учалы филиалында заман талап иткән геолог, эколог һөнәрҙәрен дә үҙләштерергә мөмкин. Ғөмүмән, филиал менән танышырға теләүселәргә уның ишектәре һәр ваҡыт асыҡ.

**Мөнир ИҠСАНОВ.**
**Учалы ҡалаһы.**

✓ ...Шәмсиәне был "уңайлы нәмә" төнгә өстә уятты. Былай ҙа тауыҡ шикелле генә төнәгән әбей беренсе "Пип"тән үк күҙҙәрен асты. Тәүге уйы: "Өй эйәһе... кәзәм бәрәсләһә, белдерәләр... рәхмәт төшкөрө..." - булды.



Шәмсиә әбей Орҡоя әбейҙең ҡара-ҡаршы күршеһе. Орҡоя кеүек үк, балалары үҫеп осҡас, яңғыҙ ҡалған инәғоштай ултыра. Бабайҙары ла күптән юҡ инде. Ғүмер буйы күрше булып йәшәнеләр, балалары бергә уйнап үҫте. Күршеләрсә һәүетемсә генә бер-береһенә һуғымға, өмәләргә, башҡа байрам аштарына йөрөштөләр. Әле яңғыҙҙар.

Ана шул яңғыҙлыҡтанмы, һуңғы ваҡыт ике әбей үҙ-ара сәмләнешер булды ла китте. Орҡояға балалары төҫлө телевизор алып килеп биргәйне, күршеһенә тегенеһенең: "Төҫләһөн ҡараһаң, төҫһеҙ дилвызыр һүрәт шайы ла түгел икән ул",- тип шапырыныуы оҡшаманымы, әллә үҙенең аҡ-ҡара телевизор ҡарап ултырыуына кәмһендеме - хәтере ҡалды. Быға тиклем ҡараған телевизорын "шарт" иттереп һүндереп, өҫтөнән шәлъяулығын ябып үк ҡуйҙы. Балаларына һүҙ ыңғайы: "Боҙолдо, "Ефрәсинйәне" ҡарап бумай инде һәҙер",- тигәнерәк хәбәр ташларға ла онотманы. Оҙаҡ көттөрмәне тегеләре: аҙна-ун көн тигәндә, ҙур булмаған "Акай" телевизоры иҫкеһенең урынында ҡуҡырайып ултыра ине инде...

Унан Шәмсиәгә бер ҡыҙы шау сағыу биҙәктән генә торған мамыҡтай йомшаҡ плед алып килде. Әбей шул көндө үк уны Орҡояға индереп күрһәтте. "Мындай матур нәмәне үҙем тәүгә күрәм, һинең дә күргәнең юҡтыр тейем", - тине. Күршеһе бик оҙаҡ текләп, хатта һәрмәп ҡараны. Бигерәк кенә лә йомшаҡ, үтә генә лә ҡупшы ине шул әйбер. Унан береһе ҡәнәғәт булып ҡайтып китһә, икенсеһе нәфсе ҡортоноң күңел итен "ҡырт-ҡырт" кимереүен тыңлап ултырып ҡалды.

Ултырып ҡына ҡала буламы Орҡоя, күршеһе сығып китеү менән район үҙәгендә йәшәгән килененә шылтыратты. "Ул плед һиңә нимәгә, ҡәйнәм, ҡаралдыңдан күп нәмәң юҡ",- тип аптыраны килене. "Кәрәк, - тине өҙөп кенә ҡәйнә, - әпкил, килен, һаҡын түләрмен".

Ике йылдан ашыу барған сәмле "һалҡын һуғыш" барышында шундай уҡ юлдар менән ике күршенең дә беләктәрен күҙ яуын алырҙай йылтыр көмөш беләҙектәр биҙәне, өҫтәлдәренә һыуын оҙаҡ һыуытмай һаҡлай торған термосамауырҙар менеп ултырҙы, аптечкаларына автомат ҡан баҫымын үлсәгестәр килеп ятты. Әйткәндәй, әбейҙәр икеһе лә электр самауыры сәйен эсмәне, ә инде теге аппараттарын асып та ҡараманы. Быларҙан тыш, әбейҙәрҙең ауыл магазинынан, ситтән килгән алыпһатарҙарҙан алған кәрәкле-кәрәкһеҙ ҡый-шаҡыһының иҫәбе-һаны булманы. Һандыҡ төптәренә, сервант кәштәләренә сыбар-собар, ялтыр-йолтор тауарҙар, ҡыйыш-мыйыш тегелгән ҡытай күлдәктәре, ябыныуға барымһыҙ шыумалаҡ үзбәк яулыҡтары, башалтайҙары, тәпешкәләре ырғытылды. Ҡайһы бер Хоҙай ҡушмаған әйберҙәрҙе әбейҙәр балалары әрләүҙән ҡурҡып, төпкәрәк тә йәшерҙе.

Бер көн Орҡояның күҙе алыпһатар кибетендәге кескәй өй сүрәтендәге сәғәткә төштө:

- Мынау сәғәтең нисә тәңкә, балам?

- Будильник был, инәй, бына ошо ҡыҙыл телен кәрәкле ваҡытҡа ҡуйһаң, зырылдап уята. Бик уңайлы нәмә.

"Уңайлы нәмә"гә йәһәт кенә икенсе әбей ҙә иғтибарын күсерҙе һәм, күршеһенән алда өлгөрөргә тырышып, ҡулъяулығын тағата башланы:

- Ҡана, бир шуны, ҡыҙым, алайым.

Орҡоя эсенән: "Аһ-аһ, был сәғәт Шәмсейгә ней бысағыма?"- тип аптыраһа ла, унарлыҡтарын һанап һондо:

- Мин дә алайым, унда-бында сыҡҡанда һуңламаҫҡа...

Әлбиттә, ике әбейҙең дә будильникка мохтажлыҡтары юҡ ине. Быны улар үҙҙәре лә бик яҡшы белә. Будильник менән уяныу түгел, йоҡлай алмай йонсойҙар, таң әтәстәренән алда уяталманы. Ахырҙа, кире урынына ҡуйып, ишетмәмешкә һалыша булып бәйләменә ултырып алды. Ишетмәй ҡара, ҡәберҙән торғоҙоп ултыртыр был.

- Сәнселгер! - Орҡоя йән асыуына бәйләмен урындығына бырағатты ла, тороп кейенә башланы. Йылы күкрәксәһе өҫтөнән башынан аша оло дебет шәленә уранғас, будильникты таҫтамалға төрөп тотоп, йөн ойоҡло аяҡтарына тәрән ҡырлы галуштарын элеп алып, ишеккә ыңғайланы. Ишек асылыуға, ҡурҡышынан күптән тупһа төбөндә боҫоп ултырған бесәй ҙә, хужабикәһен эләктереп йыға яҙып, тышҡа атылды. Туңғаҡ ергә һаҡ баҫырға тырышып, күрше урамдағы ейәне йортона юлланды ул. Өлкән улының малайы ауылға килеп йөрөп, фельдшер ҡыҙға өйләнеп, ошонда төпләнгәйне. Һәйбәт барышында алыпһатарҙан алып ҡалған кеҫә фонарен бите тәңгәленә күтәреп, үҙе шул яҡтылыҡ аҫтында өрәк шикелле булып торған әбейенә: "Нишләп йөрөйһөң был ваҡытта",- тигәндәй, аҡыш күҙен әйләндереп бер генә ризаһыҙ ҡараш ташланы ла, быуаҙ кәүҙәһе менән ауыр тын алып, "мырт-мырт" көйшәп ятыуын белде.

Инһә, теге һаман сыйылдай, дөрөҫ, тауышы алыҫтан ишетелгәндәй, әммә былай ҙа көйгәләк әбейҙең һарыуын ҡайнатырға етә. Шәмсиә һелкетә баҫып барып сәғәтте ҡаралды араһынан тартып сығарҙы һәм "ялп" иттереп соланға сығарып ҡуйҙы:

- Дошман! Өйҙә йәшәй белмәгәсең утыр ошонда туңып!

Ҡарсыҡ тынyслана төшөп, усағына ут яҡты. Сайырлы ағас




нышып ултыралар. Ашығып, һуңлап барырҙай, ҡабаланырҙай урындары булһасы! Икеһе лә хәҙер һыйыр тота алмай, көндәре кәзәгә лә, тауыҡҡа ҡалған.

Алыпһатар ҡыҙ будильниктарын маҡтай-маҡтай, әбейҙәрҙе тамам әүрәтеп, сәғәттәренә бушлай батареялар ҡуйып биреп ебәрҙе. Теге, ауыл өйөнә оҡшатып, мөрйәләп тороп эшләнгән кескәй будильниктар алып ҡайтылып, береһе телевизор өҫтөнә, икенсеһе сервантҡа ҡуйылды һәм уларҙы инде башҡаса иҫләүсе булманы.

Тик улай ғына онотола торған нәмә түгел икән ул будильник тигәнең. Үҙенең был йортта барлығын Орҡоя ҡарсыҡҡа ул киске сәғәт унда белдерҙе. Ҡапыл яңғыраған үҙәк өҙгөс әсе тауыш арҡаһын йылы мейесенә терәп, ойоҡ бәйләп ултырған әбейҙең ҡотон алды. Хужабикәһе эргәһендә мырлап ҡына ойоп ятҡан бесәй, көтөлмәгәнлектән һикереп тороп, арҡаһын доғаландырҙы. Әбей ҙә, бесәй ҙә башта тауыштың ҡайҙан сыҡҡанын аңлай алмай торҙо. Икәүләшеп ҙур асылған күҙ ҡараштары менән кескәй өй эсен һөҙөп сыҡтылар. "Әһә! Буҙилник..." Орҡоя ойоған аяҡтарында алпан-толпан барып, теге нәмәне ҡулына алды ла... ҡалайтып һүндерергә белмәне. Артында бер генә бормасы бар барлығын, тик уныһын ҡайһы яҡҡа өйөрөлтһә лә сәғәт һаман әсе зырлай бирҙе.

Оҙаҡ мәшәҡәтләнде әбей. Улай итте, былай итте, хатта теге "өй"ҙө ныҡ ҡына итеп һелкетеп тә ҡараны, әммә тауыш туҡбулды әле, үҙенә лә күҙ-ҡолаҡ. Татыу ғына йәшәп яталар, биш йәшлек туп шикелле малайҙары үҫә.

Таҫтамал эсендә сыйнаған сәғәтте ҡуйынында ҡыҫа тотоп атлаған әбей ейәненең ҡапҡаһына килеп етеп, тотҡаға үреләйем тигәндә генә боҙло урынға баҫып, тайып китте.

- Әттә-ген-нәһе-е! - ҡоламаҫҡа тырышып сәбәләнгәндә ҡуйындағы төргәк ситкә атылды, ҡарсыҡ ҡулдарын болғай-болғай салҡан ауҙы...

...Шәмсиәне был "уңайлы нәмә" төнгө өстә уятты. Былай ҙа тауыҡ шикелле генә төнәгән әбей беренсе "Пип"тән үк күҙҙәрен асты. Тәүге уйы: "Өй эйәһе... кәзәм бәрәсләһә, белдерәләр... рәхмәт төшкөрө..." - булды. Теге тауыш һаман ярһығас, тамам йоҡоһо осоп, тороп ултырҙы. Стена буйлап һәрмәләнә-һәрмәләнә барып ут ҡабыҙҙы. Эштең ниҙә икәнлеген төшөнгәс, көйөп үк китте:

- Йоҡтап ята тей микән, шу һәтте һөрәндәмәһә!

Ҡарсыҡ ҡулындағы кескәй будильник тегеләй әйләнде, былай тулғанды, алды ла, арты ла ҡаралды, бер ултырҙы, бер ятты. Шәмсиә тамам алйыны.

Башындағы тырылдағына баҫа ла һүндерә торғайнылар элек, әллә нинәмә уйҙап табалар бит һәҙер, ҡороғорҙар!

Будильник асыулы хужабикәнең башта яҫтығы, унан күпмә түшәге аҫтына тығылды. "Сығып ингәнемсә баҫылыр әле",- тип кәзәһен ҡарарға булды Шәмсиә. Бәрәсләмәгән икән, әлеге шул сәмле "ярыш" сытырлап тоҡанды ла, күңелле дөрөлдәп янып та китте.

Шул ваҡыт Шәмсиәнең башына әлеге ҡарағай әҙернә менән тондорҙолармы ни: "Теге сыйылдаған урам яңғырата, Орҡоя ла ишетәлер бит!" Әбей эләгә-тәгәрәй тышҡа ташланды. Көҙгө һалҡын таңда бөтә донъяға яр һалған будильникты эләктерә һалып, ҡәҙерле нәмәһендәй күкрәгенә ҡыҫты ла, аяҡ остарына баҫырға тырышып, өйгә шылды. Эскә ингәс тә, нәмә урлап ҡайҙа йәшерергә белмәй сәбәләнгән бур шикелле, әле былай, әле тегеләй йүгергеләне, ахырҙа, һис ни уйлап таба алмаҫтан, тамам алйып, ҡулындағыһын иҙәндә ултырған ашлы һыуына төшөрҙө лә ебәрҙе. Ниһайәт - тынлыҡ.

Әммә эш уның менән генә бөтмәгән икән. Тын алышы яйланып, ярһыуы баҫылғансы, тип биҙрә янында сүгәләп ултырған Шәмсиә бер ваҡыт үҙенең башы әйләнеп тәнтерәкләй барыуын тойҙо. "Ай, Алла, көйҙөрөп бара мынау... ыһ, дәвлинйәм микән..." Хәле аптечканан дарыу алып ҡабыуға ла, урындығына барып ауыуға ғына етте.

Шулай ятып, аҙмы-күпме көс туплағас, Шәмсиә ҡарсыҡ, медпункттың асылыу ваҡытын саҡ көтөп алып, ҡуҫҡар аҙымдары менән шунда юлланды. Барып инһә, йөҙө ҡағыҙ төҫөнә инеп буҙарып, ирендәре күгәреп, күҙҙәре төпкә батып киткән күршеһе лә шунда ултыра икән. Үҙенең бил тәңгәленән әллә ниндәй ептәр һуҙылышып сығып, нимәгәләр тоташып тора.

- Ыһ, нихәл күрше, ауырып киттеңме әллә, ыһ...

Орҡоя башын бора алмаһа ла, күршеһенең тауышын таныны:

- Ҡазаланып ҡалдым бит бына... Бәлә аяҡ аҫтында икән беҙҙең йәштә ней. Мына, килен билемде йылыттыра.

Унан тәңгәленә килеп еткән күршеһенең ҡара янған йөҙөнә күҙ алмаларын ғына күтәрә алды:

- Үҙең дә ауырып тораң түгелме...

- Дәвлинйәм шулайта бит минең, ҡапыл аяҡтан йыға ла ҡуя... ыһ...

Фельдшер йылдам ғына килеүсенең ҡан баҫымын үлсәне һәм бер-бер артлы ике укол ҡаҙап, арҡаһын терәтеп ултыртып ҡуйҙы.

Ике әбей ике яҡта тыһылдашып ултыра торғас, ойоп барғандарҙай ине, шул ваҡыт оло шау менән кескәй малай атылып килеп инде:

- Әсәй! Әсәй! Ҡара! Ҡара нимә таптым!

Фельдшер ҡатын төпкө бүлмәнән сыға һалып, улын тыйырға ашыҡты:

- Сеү! Шым! Бында ҡысҡырырға ярамай... Ана бит өләсәйҙәр ауырый...

Малай тыйыуҙы ишетерҙән түгел ине, һөрәнләүен белде:

- Ҡара, әсәй, будильник! - малай ҡулындағы кескәй өй "шап" итеп ике әбей уртаһындағы тумбочкаға килеп ултырҙы. Таныш һындан әбейҙәрҙең баштары үҙҙәренән-үҙе гөбөргәйелдеке шикелле яурын эсенә һеңде, күҙҙәре был әйберҙе мәңге күрмәҫтән булып сытырлатып йомолдо, укол-дарыуҙар менән яңы тынысланған йөрәктәре хәлһеҙ аяҡтарын йүгереп ҡасырға өндәп дарһылдап тулап китте.

Әсә аптырай төштө:

- Бәй, будильник шул. Ҡайҙан алдың?

- Үҙебеҙҙең ҡапҡа эргәһенән таптым. Ҡара, әсәй - пипелдәй!

Ике әбей ике яҡтан хәлһеҙ сәбәләнеп өлгөргәнсе, таныш ауаз бүлмә тынлығын телде: "Пип-пип... Пип-пип... Пип-пип..."

- Ай алла, аны нишәп ҡабыҙа икән, ҡалайтып һүндерәбеҙ инде һәҙер!

- Үлтерер инде мине был буҙилник, ҡайҙан алдым ҡороғорҙо, ҡайҙан алдым...

Ололарҙың ҡапылғара ҡубып ризаһыҙлыҡ белдереүенән уңайһыҙланған фельдшер ҡатын улына ҡаты ғына өндәште:

- Йә, булды - күрҙек. Һүндер ҙә алып кит.

Әбейҙәр бер ауыҙҙан ыһылданы:

- Ҡалайтып һүндерһен ул аны...

- Һүнмәй бит ул, һәле бөтмәйсә...

Сабый кескәй бармағы менән өйҙөң ҡыйығынан суҡайып сығып торған мөрйәһенә баҫты. Мөрйә эскә инә биреп, еңелсә генә шыҡылданы ла... сигнал тынды. Ул арала малай, шатлыҡ ташҡыны һис кенә лә һүрелмәҫтән, табышын эләктерә һалып урамға сапты. Әбейҙәр асҡан ауыҙҙарын ябырға онотоп ҡарап ҡалды. Был мәлдә уларға бер-береһенең күҙенә ҡарау, нисектер, уңайһыҙ ине. Сәмләнеү, ярышыу ҡайғыһы ла киткәйне...

ИЖАДХАНА



# БАШҠОРТ КИНОҺЫ "ЕҢМЕШ"...

## Францияның Канн ҡалаһында уҙғарылған кинофестивалдә ҡатнашты

(Башы 1-се биттә).

### Алма ағасынан алыҫ төшмәгәндәй...

Бәләкәй саҡтан шундай ваҡиға иҫтә ҡалған: әсәйем мине ҡулына алған да усаҡҡа ҡарап ултыра һәм башымдан һыйпап: "Минең улым ҙурайғас депутат йәки директор була", - ти. Шуға күрә мин бәләкәй саҡтан ошо хыял менән яндым. Шулай ҙа бөтә ғаиләм сәнғәт кешеләре булғас, алма ағасынан алыҫ төшмәй, тигәндәй, мин дә сәнғәт юлынан китергә булдым. Мәктәпте тамамлағандан һуң Сибай сәнғәт колледжының актерлыҡ бүлегенә уҡырға индем. Башта был һөнәрем оҡшай ине, ролдәрҙе лә ихлас башҡарҙым. Шулай ҙа III курста уҡығанда театрҙы киләсәгем тип күрмәнем, сәхнәлә уйнап йөрөгәндә мин уның артында йөрөргә тейешлегемде, йәғни миңә режиссер һөнәре нығыраҡ тура килгәнен аңлай торғайным. Колледжды ҡыҙыл дипломға тамамлағас, Санкт-Петербург ҡалаһына юл тоттом һәм Кино һәм телевидение университетының экран сәнғәте факультетына уҡырға индем. Быйыл III курсты тамамланым. Режиссер булырмын тигән маҡсатым да булмаһы кеүек, хатта мин быны тормошҡа ашырыр өсөн тырышманым да, интылманым да, ә бары күңелемә ошо һөнәрҙең яҡынлығын тоя, был турала уйлай инем. Нисектер, үҙенән-үҙе килеп сыҡты һәм бөгөн мин ошо һөнәр буйынса белгес булырға йыйынам. Үҙ юлымды, үҙ һөнәремде тапҡанмындыр, тип уйлайым. Әле уҡып ҡына йөрөһәм дә, һөнәрем үҙемә шул тиклем оҡшай, уҡыуымдан ҙур ҡәнәғәтләк алам. Хатта арытһа ла, кино төшөргәндән һуң баш ҡаңғырып бөтһә лә, тауҙарға менге, әҙәби фильмдар төшөргө, панорама яҙғы килә. Ниндәйҙер сюжеттарҙы төшөргәндән һуң монтажда ултырып, шул киҫәктәрҙе бергә йәбештереүҙән айырыуса ҙур ҡәнәғәтлек алам. Ниндәйҙер ҡағыҙ киҫәктәренән йәнле һүрәттәр тыуһын әле!

Төркөмөбөҙҙә төрлө төбәктәрҙән, ҡалаларҙан килгән йәштәр кино серҙәренә төшөнә. Бөтәһенән айырмалы рәүештә, мин бөтә уҡытыусылар менән дә яҡшы мөнәсәбәттәмен. Улар ҙа мине яҡын күреп, тартып тора, хатта бер-беребеҙгә атай менән ул кеүек ҡарайбыҙ. Олоно - оло, кесене кесе итә белеү кеүек халҡыбыҙҙа булған матур тәрбиә ысулдары кешеләр менән тиҙ уртаҡ тел табырға, яҡшы мөнәсәбәттәр ҡорорға ярҙам итәлер, күрәһең.

### Эш боҙорға әүәҫлек

Бала сағым ҡыҙыҡлы ла, ҡатмарлы ла булды. Шул тиклем еңмеш, үҙ һүҙле, тиктормаҫ, нығыш малай булдым. Бер урында ултырып сыҙаманым: иртәнге һиеҙҙә өйҙән сығып китә лә кис кенә ҡайтып инә торғайным. Һәр ваҡыт яланда, урманда, тауҙа уйнаным. Мин бөгөнгө балаларға ҡарағанда күпкә ҡатыраҡ булдым. Ата-әсәйем икеһе лә сәнғәт кешеһе булғанға күрә, миңә ваҡыттары ҡалмай торғайны. Гастролдәргә ҡайһы ваҡыт үҙҙәре менән алдылар, ҡайһы ваҡыт юҡ. Әлбиттә, улар өйҙә булмағанда, минең фантазия арҡаһында "төрлө мөгжизәләр" тыуа торғайны: ут менән уйнап, Маҡан ауылын дауаханаһыҙ ҡалдырҙым, әллә нисә гектар яландан да ҡара ер генә ҡалды. Үҙем уйлап сығарған бомба, шартлаҡтыстар тураһында һүҙ ҙә юҡ инде. Ата-әсәйемде лә ғәйепләй алмайым, сөнки бала сағым бәхетле булды, тип һанайым. Гел эш боҙоп йөрөһәм дә үлән өҫтөнә ятып төрлө сюжеттар уйларға, болоттар күҙәтергә яраттым, түбә таҡтаһындағы тишектәргә ҡарап, төрлө фигуралар уйлап сығара торғайным. Мәктәптә уҡығанда берәй һүрәт күрһәтеп, унда нисә һин барлығын һорай торғайнылар. Уҡытыусыма йөҙләгән һин күргәнемде әйтһәм, иҫәрһеңме әллә, унда бит бер генә һин төшөрөлгән, тип үҙемде әрләп ташлай торғайны. Күрәһең, мин ижади кеше булғанмындыр ҙа, үҙемде аңлаған кеше булмағас, үҙемә урын тапмай, шулай эш боҙғанмындыр.

Тиктормаҫлығым, еңмешлегем үҙемә бөгөн дә әйәреп килә, шулай ҙа хәҙер күпкә тынысландым, үҙ-үҙемә бикләндем. Эсемдә ниндәйҙер ҡойондар уйнаһа ла кешегә быны күрһәтмәҫкә тырышам. Йондоҙнамәне ҡабул итмәйем, ә бына йондоҙнамә тамғаларына бик ышанам. Үҙем арыҫлан йондоҙлоғо аҫтында ҡуян йылында тыуғанмын. Ошо ике хайуан һәр ваҡыт минең эсемдә көрәшә: ҡайһы ваҡытта арыҫлан кеүек әллә ниндәй ҙур эштәр башҡарғым килә, ләкин ҡуян кеүек ҡурҡҡан саҡтарым да була. Ә ҡайһы саҡ бөтөнләй киреһенсә: эстән ҡуян кеүек ҡалтырайым, үҙем арыҫлан кеүек ҙур-ҙур эштәр башҡарып бөтәм.

Бала сағымды һағынам: ул ваҡытта беҙ шул тиклем ирекле беҙ, азатбыҙ, нимә теләйбеҙ - шуны эшләйбеҙ, инебеҙҙә бер ниндәй ҙә вазифа ла, яуаплылыҡ та юҡ. Сабый сакта зиһенгә алыу, үҙләштереү кеслөрәк була, бөтә нәмәне лә нығыраҡ ҡабул итәһең. Бала саҡтағы бер нисә эпизод хәтеремә төшһә лә, миңә илһам бирә, дәртләндерә, яңы көс өҫтәй. Шул хәтирәләрҙең бер бәйләменән "Еңмеш" әҙәби фильмы тыуҙы ла инде.

### "Еңмеш" фильмы

Үҙемдең бала сағым тураһында автобиографик фильм төшөрөү ниәте менән күптән яна инем. Ләкин уйҙарым, идеяларым күп булһа ла, бер нисек тә сценарийҙы килтереп сығара алмайым. Шуға күрә ярҙамға дуҫым Леонид Коренға мөрәжәғәт итергә тура килде. Ул беҙҙең мәҙәниәтте бөтөнләй белмәгән икенсе милләт кешеһе булһа ла, бала сағыбыҙ бер-береһенә оҡшаш булғанға күрә, мине тиҙ аңланы. Әле лә хәтеремдә: мин бүлмә буйлап йөрөйөм, ҡулдарымды болғай-болғай бала саҡ хәтирәләрен һөйләйем, ә ул өҫтәл артында ултыра һәм мин һөйләгәндәрҙе яҙып бара. Мин һөйләгән сакта үҙе лә: "О, минең дә бала сакта шулай булды!" - тип дәртләнеп-дәртләнеп китә ине.

Сценарий әҙер булғас, уны "Башҡортостан" киностудияһы директоры Юнысов Айбулат Ғәлийән улына ебәрҙем. Ул да уҡып сыҡты, оҡшатты, фильм итеп төшөрөргә фатиһаһын бирҙе. Финанс яғынан да, ҡорамалдар менән дә, актерҙар йәһәтенән дә ярҙам иткәне өсөн Башҡортостан киностудияһы хеҙмәткәрҙәренә ҙур рәхмәтемде белдерәм.

Фильмдағы һәр хәл-ваҡиға минең бала сағымдан алынған. Төп герой шул тиклем еңмеш, нығыш, үҙ һүҙле малай. Әйтеп үтеүемсә, үҙем бала сакта шул малайҙан да яманыраҡ булдым. Төп ролде уйнаусы Ғәлимйән Мәмбәтов мине күпкә изгерәк малай итеп күрһәтте. Әйткәндәй, мин ул малайҙы урамдан тигәндәй табып алғайным. Ул ниндәйҙер эске күркәмлеге менән үҙенә йәлеп итте. Төп геройҙы һайлағанда яңылышмағанмын, тип уйлайым, үҙенең ролен шул тиклем бирелеп, асылып китеп уйнаны. Шулай уҡ башҡа балалар ҙа һынатманы, матур уйнанылар. Фильмда шулай уҡ атайым менән әсәйем дә төштө: атайым водитель ролен башҡарһа, әсәйем дөйөм фонда күренеп ҡала.

Былтыр йәй генә төшөрөүебеҙгә ҡарамаҫтан, "Еңмеш" фильмы менән ниндәй генә фестивалдәрҙә ҡатнашып өлгөрмәнек. Мәҫәлән, Санкт-Петербург ҡалаһында уҙғарылған "Питеркит" студент фильмдары фестивалендә "Уйын киноһының иң яҡшы режиссураһы өсөн", "PROвзгляд-2011" конкурсында "Иң яҡшы оператор эше" номинацияларын яуланы. Фильм шулай уҡ "Страна" телеканалының "Бәләкәй илгә ҙур һөйөү" махсус призына лайыҡ булды һәм "Киномир" ойоштороусыһының "Солғап алған иҫтәлектәре өсөн" дипломы менән бүләкләнде.

Быйыл "Еңмеш" фильмы башҡорт кинематограф тарихында тәүгеләрҙән булып Францияның Канн ҡалаһында уҙғарылған кинофестивалдә ҡатнашты. Минең эшем Рәсәйҙән 18 ҡыҫҡа метражлы фильмдар араһынан һайланып алынды һәм быйыл ғына тәҙәлгән "Short Film Corner" - йәш режиссерҙарҙың кино таҫмаларын конкурстан тыш күрһәтеү проектына электе. Канн - ул Олимпия уйындары кеүек, бында иң мөһиме ҡатнашыу, ә "Short Film Corner" - ул, моғайын, бары тик үҙеңдең фильмыңды һатыу мөмкинлегелер. Фестивалгә ҡыҙыҡлы ҡыҫҡа метражлы фильмдар һатып алыр өсөн йөҙәрләгән инвесторҙар килгәйне. Иртәнән кискә тиклем кинолар һатылды һәм һатып алынды. Шулай уҡ кино сәнғәте буйынса семинарҙар, мастер-кластар уҙғарылды. Бөтәһе 86 илдән 1728 фильм ҡатнашҡан фестивалдә башҡорт фильмының да күрһәтелеүе бик яҡшы күренештер, минеңсә.

### Хыялдар тормошҡа ашһын

Мин уй көсөнә, эске энергияға ышанам: нимәнелер яулар өсөн бик ныҡ теләргә кәрәк. Күҙ теймәһен, әлегә тиклем теләгәндәрем яулана бара. Бәлки, уңышлы кешемендер, юғиһә, тормошта бит йән көсөнә тырышып та уңышҡа өлгәшә алмаған кешеләр була. Күп кеше ваҡтөйәкҡә шатлана белмәй, ә мин бәләкәс кенә нәмәгә лә сабый кеүек ҡыуанам. Һәр нәмә мине илһамландырырға мөмкин: мәҫәлән, урамда уйнап йөрөгән малайҙы күреп ҡалһам, уның тураһында фильм төшөргөм килә. Сюжеттар бик тиҙ тыуа, тик уларҙы шунда уҡ яҙып барырға кәрәк. Һәр ваҡыт руль артында китеп барған булам, ғәҙәттәгесә, ҡул аҫтында ҡағыҙым булмай сыға һәм күп фекерҙәр онотола. Икенсе яҡтан, иҫтә ҡалмаған икән, тимәк, уның кәрәге лә булмаған. Ә мөһим нәмәләр һәр саҡ иҫтә ҡала ул. Идеялар бына шулай тыуа.

Фильм төшөрөүе еңел түгел, утта ла янырға, һыуҙа ла батырға тура килә, тигәндәй. Үҙем киләсәктә ныҡлап балалар киноһын үҫтереүгә тотонормон, тип уйлайым, юғиһә, Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә балалар киноһы әллә ни үҫешмәгән.

Ғөмүмән, бөгөнгө заман фильмдары тамам ялҡытты, рәхәтләнеп ултырып ҡарарҙай кинолар юҡ кимәлендә. Ысын яҡшы кино ул кешене арбай, ғәжәпләндерә, кеше тормошонда булып үткән күренештәр өҫтөндә уйланырға мәжбүр итә. Яҙыусы өсөн китап, музыкант өсөн музыка йәки рәссам өсөн картина кеүек үк, режиссер өсөн кино - ул үҙеңдең шәхси уйҙарыңды, тойғоларыңды һәм теләктәреңде күрһәтеү. Йыш ҡына кино беҙгә күптәр хыял иткән, ләкин яулай алмаған идеаль тормошто күрһәтә. Мин үҙемдең фильмдарым аша кешеләргә изгелек, яҡтылыҡ бүләк иткем, уларҙың күңеләндә изге тойғолар уятҡым килә. Тағы ла минең фильмдарым тик башҡорт телендә, үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе сағылдырырға тейеш, тип уйлайым. Әйткәндәй, сит илдәрҙә йөрөгәндә шуға иғтибар иттем: сит ил кешеләре башҡорт теле менән бик ҡыҙыҡһына, өйрәнергә теләй, фильмдарҙы ла бер ниндәй тәржемәһеҙ рәхәтләнеп ҡарай.

Быға тиклем ҡыҫҡа документаль фильмдар төшөргәнем булды. Улар менән дә ҡайһы бер фестивалдәрҙә ҡатнашып, призлар яуланым. Әлеге ваҡытта Хәйбулла районы ауылдары тураһында документаль фильм төшөрөргә йыйынам. Шулай уҡ 20 йыл тулыу айҡанлы атайымдың "Рух" төркөмө, Рауил Бикбайҙың "Почтальон малай" шиғыры буйынса һуғыш ваҡытында тылдағы беҙҙең балалар тураһында әҙәби фильм әҙерләйем. Ошо фильмдарҙы төшөрөп бөткәндән һуң оҙон метражлы фильмдарға тотонорға ниәтләнәм. Яков Протазанов төшөргән "Салауат Юлаев" фильмының замансараҡ версияһын төшөрөү теләге менән янам. Әлегә хыял ғына булһа ла, тиҙҙән был уйҙарым да тормошҡа ашыр, тип өмөтләнәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен, көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәтен, милли булмышын сағылдырған башҡортса милли колоритлы фильмдар сығарыу бөгөнгө көндә үҙебеҙҙе донъя кимәлендә танытыу өсөн генә түгел, ә халҡыбыҙҙа милли рух, үҙ халҡың, телең менән ғорурланыу тойғоһо үҫтереү, үткәнебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, йәшәйешебеҙҙе өйрәнеү йәһәтенән дә ҙур әһәмиәткә эйә булыр ине. Бөгөнгө студент, йәш режиссер Айнур АСҠАРОВ кеүек талантлы, дәртле, маҡсатлы йәш режиссерҙар булғанда, башҡорт киноһы киләсәктә ныҡлы үҫеш алыр, тип ышанғы килә.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТАТЛЫ АҘЫҠТАР... ғүмерҙе ҡыҫҡартыуы ихтимал

■ Великобританияның Эдинбург ғалимдары стрестың мейегә йоғонто яһау механизмын асыҡлаған. Баҡтиһәң, стресс гормоны кортизол мейенең ике рецепторына тәьҫир итә икән. Кортизол түбән саҡта мейенең бер рецепторы әүҙемләшә һәм был хәтерҙең яҡшырыуына килтерә. Кортизол кимәле саҡ ҡына күтәрелеү менән, киреһенсә, хәтерҙең насарайыуына килтереүсе икенсе рецептор әүҙемләшә. Өҫтәмә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, оҙайлы стресс мейенең нормаль эшен боҙоп, хәтерҙең насарайыуына килтерә ала, был бигерәк тә оло йәштәге кешеләр өсөн зарарлы. Ә оҙайлы булмаған стресс хәтерҙе яҡшыртыу һәләтенә эйә.

■ Мичиган университеты тикшеренеүселәре асыҡлауынса, ҡайһы бер кешеләр пессимист булып китмәй, ә тормошҡа ошондай ҡараш менән тыуа икән. Кешенең донъяны нисек ҡабул итеүе организмда нейропептид Y (NPY) молекулаһының күләменә бәйле, ә был матдәнең күләме күпме булыуы гендарҙан килә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмдарында нейропептид күләме аҙ булған кешеләр депрессияға тиҙерәк бирелә.

■ Табиптар әйтеүенсә, йәш үҫмер ҡыҙҙарҙың 70 процентының организмына йод етешмәй. Был ҡыҙҙарҙың сәләмәтлегенә өсөн ҡурҡыныс түгел, әммә уларҙың киләсәктә һау-сәләмәт бала таба алыуы икеле. Сөнки йод әсә ҡарынындағы баланың баш мейеһе үҫешендә ҙур роль уйнай. Королева дауаханаһы (Лондон) табибы Марк Вандерпамп белдереүенсә, ҡалҡан биҙе дисфункцияһы менән сирле ҡатындан интеллект кимәле 10-15 тиҫтәгә кәмерәк булған балалар тыуа. Белгестәр фаразлауынса, йод етешмәүе мәктәп йәшендәге ҡыҙҙарҙың һөттө аҙ эсеүе менән бәйле булыуы ихтимал.

■ Калифорния ғалимдары глюкозаның йәшәү оҙайлығына тәьҫирен асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең тәүге һөҙөмтәләрен ҡулға алыу менән был ғалимдарҙың барыһы ла үҙҙәренең рационынан татлы аҙыҡтарҙы алып ташлаған. Хайуандарҙа үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, татлы аҙыҡтарҙы күп ашау ғүмер оҙайлығын 20 процентҡа түбәнәйтә. Был тәжрибә кешеләрҙә үткәрелмәһә лә, ғалимдар бер ҡалаҡ шәкәр ҙә кешенең сәләмәтлегенә зыян килтерә ала, тип раҫлай.

■ Генетик яҡтан эсәк яман шешенә биреүсе кешеләр фолий кислотаһына бай аҙыҡ-түлек ҡулланып, сирҙе иҫкәртә ала. Уларға көн һайын яҡынса 400 грамм фолий кислотаһы ҡулланырға кәрәк: ул бигерәк тә шпинатта, брокколиҙа, кәбеҫтәлә, бауырҙа күп.

■ Австралия ғалимдары белдереүенсә, яңы сабылған үлән еҫе психотерапевтик тәьҫиргә эйә. Улар яңы ғына сабылған үләндә миндалина һәм мейенең хистәр барлыҡҡа килеү һәм стресс ситуацияларында үҙенде тотоу өсөн яуап биргән бүлексәләренә йоғонто яһаусы матдәләр тапҡан. Был еҫтәрҙе еҫкәгәндән һуң кеше тынысланa һәм уның кәйефе яҡшыра. Ғалимдар ошо тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса яңы һауа сафландырыусы сара уйлап тапҡан. Тиҙҙән Великобританияла уның бер баллоны яҡынса 200 һумға һатып алып буласаҡ.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Дүрт йыл самаһы элек ирем менән икәүләп Башҡортостан шифаханаларының береһендә ял итеп ҡайттыҡ. Балалар бәләкәй саҡта эш урынынан бушлай путевка бирһәләр ҙә, йөрөргә форсат теймәй торғайны. Хәҙер, Аллаға шөкөр, донъя ҡараулы, шуға һис бер нәмәгә борсолмай, тыныс күңел менән тән һәм йән шифаһы алып йөрөп ҡайттыҡ. Йәштәр күп түгел ине: үҙебеҙ ише оло кешеләр менән туғандар кеүек, яҡындан аралашып йәшәнек. Тәүге көндө үк танышыу кисәһе булды. Шунда беҙ Әбйәлилдән икәнлегебеҙҙе әйткәс тә, янибыҙға етмеш биш йәштәр тирәһендәге бер ҡарт йүгереп тигәндәй килеп етте. "Һеҙ ҡайһы ауылдан? Фәлән ауылды беләһегеҙме? Ул һеҙгә яҡынмы?" - тип төбәшә башланы. Уны ҡыҙыҡһындырған ерҙән алыҫ йәшәүебеҙ, кешеләрен белмәүебеҙ тураһында әйткәс, ағайҙың күҙҙәрендәге осҡондар һүнеп, күңеле төшкән кеүек булды.**



# ЫСЫН МӨХӘББӘТ БАР БИТ УЛ...

Иртәгәһенә яңы танышыбыҙ беҙҙе күреү менән киң йылмайып, йәнә яңыбыҙға килеп баҫты. Әбйәлилгә ҡағылышлы һорауҙарын яуҙыра башланы. Һөйләшә торғас, уртаҡ таныштар ҙа табылды. Шулай һәр көн һайын саф һауаға ирем һәм Ғәлимйән ағай менән өсәүләп сығып йөрөр булып киттек. Ҡайһы бер ял итеүселәр мине: "Әллә һин ике бабай менән килдеңме?" - тип шаярта ла башланы.

Ғәлимйән ағайҙың күңел төбөн тынғыһыҙлап торған иң мөһим һорауын һаман бирә алмай ыҙалауын һиҙеп тора инем. Ахырыны, ярҙам итеп ебәрмәксе булып, тоттом да унан: "Әллә Әбйәлилдә берәй һөйгәнегеҙ тороп ҡалдымы?" - тип һораным. Ҡарт, тап өҫтөнә баҫтың, тигән кеүек, күҙҙәрен һағышлы көләмләйтеп торҙо ла: "Булды инде", - тип, алыҫ 50-се йылдарҙа башланған бер тетрәткес ваҡиғаны һөйләп алып китте.

Һуғыштан һуң да әле Әбйәлил районы йәштәрен күрше Бөрйән, Белорет яҡтарына ағас эшенә ебәрер булалар. Сайыр йыйырға барған төркөмдә Т. ауылынан Нәфисә исемле бик сибәр ҡыҙ ҙа була. Ғәлимйәндең бер күреүҙән уға күҙе төшә. Тегеһе лә йылы хистәр менән яуаплай. Егет гармунда уйнай, ҡыҙ матур итеп бейей, икеһе лә һөйкөмлө - улар һоҡланғыс пар була.

Әбйәлилдәр ҡайтып киткәс тә Ғәлимйән һуҙендә тора: ҡоҙа ебәреп, туй үткәреп, Нәфисәне кәләш итеп ала. Тик ғашиҡтарға бергә бәхетле ғүмер кисерергә насип булмай. Бер йыл үтеүгә, мөхәббәт емеше булып ҡыҙҙары тыуғас, Ғәлимйәнде армияға алалар. Ул әсәһенә: "Килененде ситкә типмә, мин ҡайтҡансы бергә йәшәгеҙ", - тип ҡуша. Нәфисә лә, тыуған яғына ҡайтмай, ирен ошонда көтөргә һүҙ бирә. Тик ҡәйнә кеше - үҙе 40-ҡа ла етмәгән тол ҡатын - киленен оронсоҡ күрә башлай. Ашау яғы ла наҡыҫ. Һәфисә ҡыҙын күтәреп, йөҙәр саҡрымдарҙы йәйәү үтеп, атай йортона ҡайтып китә. Был турала ул иренә лә хәбәр итә. Германияла дүрт йыл хеҙмәт иткән Ғәлимйән кәләшенә аҙнаһына ике тапҡыр хат ебәреп тора, яҙырға ваҡыты булмаһа, һаулығын белдереп, открытка булһа ла һала. Ә инде үҙе менән хеҙмәт иткән Әбйәлил егете атаһын ерләү өсөн отпускыға ҡайтырға булғас, уның аша бүләктәр ебәрә. Тик ошо күстәнәстәрҙең тормошон аҫтын-өҫкә әйләндерәсеген белмәй шул Ғәлимйән.

Нәфисә лә һалдатына дебеттән бирсәткә бәйләп ебәрә. Уларҙы тапшырғанда, Әбйәлил егете: "Кәләшең бигерәк һылыу икән. Бер районда йәшәп, нисек мин күрмәгәнмен дә, нисек һин алдан өлгөргәнһең", - тип Ғәлимйәндең күңеленә көнләшеү орлоҡтары сәсеп ҡуя. Ул арала Ғәлимйәнгә ҡайтыр мәл яҡынлаша. Ул Нәфисәне фәлән көндөң фәлән сәғәтендә Магнит вокзалына килергә саҡыра. Дүрт йылды һағыштан һарғайып, илап-һыҡтап үткәргән йәш ҡатын ҡыуанысынан ҡанатлы ҡош кеүек талпынып, юл алыу тип тормай, ҡыҙын алып ҡалаға юллана. Вокзалға Магнитта йәшәгән еңгәһе менән баралар. Поезд килеп туҡтай, ләкин күпме көтһәләр ҙә, унан Ғәлимйән төшмәй. Нәфисә был хәлдең хәйерлегә түгел икәнлеген һиҙеп, ерҙә тәгәрәп ятып илай. Еңгәһе уны бер нисек тә йыуата алмай, перрондағы халыҡ аптырап тамаша ҡыла. Дүрт көн рәттән сыға Нәфисә поезд ҡаршыларға, ләкин ирен күрә алмай.

Ысынында Ғәлимйән менән нимә булa һуң? Ул күтәренке күңел менән, ниһәйәт, кәләше һәм ҡыҙы менән осрашыуын күҙ алдына килтереп, сумаҙанын бүләктәр менән тултырған мәлдә Т. ауылынан Нәфисәнең бер еңгәһенән хат ала. Ул ҡайниһенлеһен ни өсөн күрә алмағандыр инде, билдәһеҙ, әммә үҙенең ҡара ниәтенә ирешә. Еңгә кеше Ғәлимйәнгә Нәфисәһенең армиянан килеп китҡән һалдат менән тетперп ҡалыуы тураһында яҙа. Кеше һүҙе кеше үлтерә, тигәндәре шул инде. Хыянатты кисерә алмай, мөхәббәте нәфрәткә әйләнгән ир, Магнитта поездан төшмәй, Белорет яғына үтеп китә. Әлбиттә, ул Нәфисәнең, поезд ҡуҙғалып киткәс, ер тырнап, өҙгөләнеп илауын күрмәй. Күрһә, мофайын, ҡатындың әсе күҙ йәштәре туң йөрәген иретмәй ҡалмаҫ ине.

Нәфисәгә яңынан тыуған ауылына ҡайтмайынса сара ҡалмай. Ләкин ул иренән төңөлмәй, көтә. Сөнки айырылышҡан саҡта икәүһенең: "Ер өҫтөндә осраша алмаһаҡ, ер аҫтынан юл ҡаҙып булһа ла, бер-беребеҙҙе табырбыҙ", - тигән анттары була. Нәфисә күпме генә көтһә лә, ҡош телендәй сәләм дә килмәй. Ә ауылда уға күҙ һалып йөрөүселәр байтаҡ. Араларынан бер үтә лә ныҡышы атаһының ышанысына инеп ала. Нәфисәнең атаһы уҫал, үҙ һүҙен бирмәгән, башҡаларҙыҡы менән иҫәпләшеп тормаған кеше була. Шуға күрә, үҙе теләмәһә лә, Нәфисә ата һүҙен йыға алмай, яратмаған кешеһенә кейәүгә сыға. Тәндәрен илап үткәрә ул. Ире барыһын да һиҙә, ләкин өндәшмәй. Бер-бер артлы балалары донъяға килә, ә бына Ғәлимйәндән тыуған ҡыҙы, күҙ нуры, ауырып үлеп ҡала. Тора-бара мөхәббәтен онотор, тип көткән ире, үҙемлеге бөтөп эсә, болара башлай. Эйе, Нәфисә яңғыҙ ҡалған саҡта һөйгән йәренең фотоһүрәтен ҡарап, хаттарын уҡып, күңелен йыуатыр була. Һыуға барһа, хаттарҙы кеҫәһенә һалып, аулаҡта уҡып, илап күңелен бушата. Бер саҡ ире уларҙы һандыҡ төбөнән табып, утҡа ырғыта. Ә бына Ғәлимйән армиянан ебәргән шәлде Нәфисә, кемдән икәнлеген белгертмәй, тупып бөткәнсе ябына.

Ә Ғәлимйән армиянан тыуған яғына ҡайтып төшкәс, ҡатынын бер ҡасан да ғәфү итмәскә тигән ҡарарға килеп, ҡара янып йөрөй. Тора-бара асыуы һүрелә төшә, һағыныуы көсәйә. Әбйәлилгә барырға, ҡатынын алып ҡайтырға уйлай башлай. Тик байтаҡ ваҡыт үтеп киткән була шул. Нәфисә кейәүгә лә сыҡҡандыр, сыҡмаһа ла, уның ҡасып йөрөүен ғәфү итә алмаҫ, ти уйлай. Ҡыҙынан алда атаһы, тупһаһына ла баҫтырмай, ҡыуып сығарасаҡ. Үҙе атайһыҙ үҫкән Ғәлимйән ҡырыҫ холоҡло ҡайныһынан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа. Шулай икеләнеп йөрөгәндә, Әбйәлилдән тағы бер төркөм йәштәр сайыр йыйырға килеп төшә. Был юлы улар араһында Нәфисәнең бер туған һеңлеһе лә була. Ул элекке еҙнәһенә апайын көсләп кейәүгә биреүҙәре, ҡыҙы үлеп ҡалыуы тураһында һөйләй. Шундай хәбәрҙәрҙән һуң аңҡытинке килеп йөрөгән Ғәлимйәнде ауылдарына килеп төшкән геологтар үҙҙәре менән эшкә алып сығып китә. Кама буйҙарында йөрөгәндә ул бер ҡыҙ менән танышып, шуға өйләнә һәм тыуған яҡтарына ҡайта. Ҡатыны донъя көтөргә әүәҫ булып сыға, биш бала табып бирә. Татыу, мул тормошта йәшәй улар.

Бөтәһе лә һәйбәт кеүек, ләкин Ғәлимйәндең тәүге мөхәббәте иҫенә төшөп, тынғы бирмәй. Нәфисә тураһында берәй хәбәр алып булмаҫмы тип, ул Әбйәлилдәге хеҙмәттәшенә хат ебәрә. Уныһы әрнегән йөрәгенә тағы тоҙ һибеп, "Ташларыңды белгән булһам, үҙем кәләш итеп алыр инем", тип яҙа. Хат аша элекке ҡатынының тол ҡалғанын белгән Ғәлимйән ярһыған йөрәгенә урын тапмай башлай. Әмәлгә ҡалғандай, шул саҡта өлкән улы эш буйынса Сибайға барырға йыйыныуын белдерә. Шунда атай кеше улына бөтә серен сисә һәм юлға үҙен дә алыуын, Т. ауылына һуғылып, Нәфисә менән осраштырыуын һорай. Тегеһе риза була. Ләкин... Яҡшылап күрешеү ҙә, бер-ике ауыҙ һүҙ алышыу ҙа насип булмай. Саҡырылмаған ҡунаҡтар Нәфисәнең бергә йәшәгән улы эсеп, өйҙә тауыш сығарған мәлгә тура килә. Ғәлимйәнде танығас да, улы өсөн унайһыҙланыуҙан да икеләтә ҡыйын хәлгә ҡалған ҡатынды йәлләп, иҫеректең ҡыуыуына ла ҡаршылаша алмай, юлсылар сығып китергә мәжбүр була...

* * *

Ғәлимйән ағайҙың һөйләгәндәрен мин күҙ йәштәремде һөртә-һөртә тыңланым. "Бындай мөхәббәт тарихы тик китаптарҙа йә киноларҙа ғына булалыр тип уйлай инем, - тинем мин. - Хәҙер бындай сер менән нисек йәшәргә? Етмәһә, Нәфисә менән бер районда була тороп... Юҡ, ҡайтҡас та мин уға барам, күрәм, һөйләшәм. Бәлки, ул, бахырҡай, үҙен ни өсөн ташлауҙарын һаман да белмәй йәшәйҙер...". "Юҡ, бәлә, балдыҙ аша мин бөтәһен дә аңлатып һөйләнем", - тине Ғәлимйән ағай, шулай ҙа ниәтемә ҡаршылыҡ белдермәне, хатта фотоһүрәтен дә бирҙе. "Күп итеп сәләм әйт. Кисерә алһа - кисерһен. Алдында ғәйебем ҙур, ризалығын алып

***✓ 2012 йылға тиклем һәм артабан бирелгән юғары энергияны күтәрергә, уға сыҙарға кәрәк. Бының өсөн аура таҙа булырға тейеш - был төп критерий. Сөнки беҙҙең ағзаларыбыҙ һәм күҙәнәктәребеҙ ауранан алған энергия менән туҡлана.***

үлгем килә", - тине. Әгәр Нәфисә апай риза булһа, барып күрергә лә теләк белдерҙе.

Шифаханан ҡайтып ул-был иткәс тә, мин улымдан Т. ауылына алып барып ҡайтыуын һораным. Нәфисә апайҙың өйөн табып барып ингәндә, ишек төбөндә бер йәш ҡатын ҡаршыланы. "Әсәйем төпкө бүлмәлә ята, ауырыңҡырай", - тине ул. Ҡыҙына ҡарап, әсәһенең йәш сағында кеше көнләштерерлек һылыу булғанына ышандым. Ҡатындан миңә әсәһе менән аулаҡта һөйләшергә ирек биреүен һорағас, ул беҙҙе ҡалдырып сығып китте.

Төпкө бүлмәгә үттем. Түшәктә йәш сырайлы, һөйкөмлө генә әбей ята. Өйө йылы, донъяһы таҙа, ҡотло. Килеүемдең сәбәбен әйткәс тә Нәфисә апай тыныслығын һәм сабырлығын һаҡланы. Ҡыуып сығарһа ла, бер ни ҙә түгел ине, тип уйлап та ҡуйғайным, тик Нәфисә апай минең менән яҡын кешеһендәй күреп, ягымлы һөйләшеп китте.

- Айырылышмай, айырылыштыҡ инде беҙ Ғәлимйән менән. Күрәһең, маңлайға яҙылған яҙмыш шундай булғандыр, - тип башланы ул һүҙен. - Ирем армияға киткәндә өс саҡрым самаһы оҙатып барҙым. Ул атҡа ултырып китә, мин арттарынан йүгерәм, ул төшөп, миңә ҡаршы килә. Ҡосаҡлашып илашып торабыҙ ҙа, ул тағы арбаға йүгерә, ә мин артынан... Иң аҙаҡ ауыл йәштәре ике беләгемдән тотоп, ебәрмәй башланы, ә мин, тартҡылашып, ергә тубыҡландым. Ғәлимйән, арбаға аяғөҫтө баҫып, фуражкаһын болғай-болғай күҙҙән юғалды. Һәм шул ҡиәфәттә хәтерҙә тороп ҡалды.

Ирем эҙләп килмәгәс, янына үҙем барһам да барыр инем - атайым ебәрмәне. Әсәйем мине йәлләй торғайны, ҡасып кит тә бар, тип өгөтләне. Тик мин атайым асыуын уға төшөрөр тип ҡурҡтым.

Бер ваҡыт шифаханаға путевка булғайны, нишләптер, шунда барһам, Ғәлимйәнде осратырмын кеүек тойолдо ла торҙо. Ашҡынып барҙым шифаханаға. Халыҡ араһынан гел Ғәлимйәнде эҙләнем, ә өмөтөм бушҡа булғанлығына ышанғас, ауырып киттем. Өфөгә ҡанатланып киткәйнем, мәхрүм булып, төңөлөп ҡайттым... Ғәлимйәнгә минән ризалыҡ һорарға сәбәп юҡ. Алланың ҡушыуы шундай булғас. Уны ла алдағандар бит. Беҙҙең саф мөхәббәтте күрә алмаған кешеләр ғәйепле бында...

Был ваҡиға тураһында, һеңлем, бер үк балалар белеп ҡалмаһын. Улар урындарҙа эшләй, минең өсөн кеше алдында уңайһыҙланырға тура килмәһен. Йә булмаһа, атайыбыҙ менән тороп, икенсе кешене уйлап йәшәгән тимәһендәр. Әйтегеҙ Ғәлимйәнгә, килһә килһен, тик яңғыҙы түгел, ҡатыны менән... - тип тамамланы һүҙен Нәфисә апай.

* * *

Үкенескә ҡаршы, Ғәлимйән ағайҙан бүтән хат-хәбәр ҙә булманы, үҙе лә килмәне. Бәлки, үлеп тә ҡалғандыр, оло кеше ине бит. Нәфисә апайҙың да артабанғы яҙмышы тураһында хәбәрҙар түгелмен. Үҙемә бөтөнләй сит ошо ике кешенең йөрәк серен дүрт йыл буйы һаҡлап йөрөттөм дә, гәзит уҡыусыларға ла һөйләргә булдым. Улар ҙа ысын мөхәббәт китапта йә кинола ғына була икән тип уйламаһындар. Геройҙарымдың исемдәрен үҙгәртеп алдым, ә йәшәгән урындарын аныҡ атаманым. Шулай ҙа уларҙы таныусылар булһа - ғәйепләмәһендәр. Бындай оло саф хистәрҙе бик һирәк кешеләр генә йөрөтә ала.

**Фатима ҺИБӘТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Рысҡужа ауылы.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Сәләмәтлек нимәгә бәйле?

Нимә ул сәләмәтлек һәм секундтың бер өлөшөндә ул нимәгә бәйле? Сәләмәтлек ҡатынығыҙға бәйле, тиһәк, бөтөн ирҙәр бер тауыштан: "Эйе", - тип яуаплаясаҡ. Алыҫ Америкала тауыҡтарға нимә ашаталар - шуға бәйле, тиһәк, хужабикәләләр ыңғай яуап ҡайтарыр. Ә сәләмәтлек, секундтың бер өлөшөндә аураға, чакраларға, тирбәлешкә бәйле. Бына сәләмәтлектең төп өс компоненты. Әгәр аурағыҙ таҙа, чакраларығыҙ камил һәм тирбәлешегеҙ юғары икән, һеҙ абсолют сәләмәт буласаҡһығыҙ. Уларҙы таҙартыу, гармониялаштырыу, күтәреү бөгөн бигерәк тә көнүҙәк. Сөнки 2012 йылға тиклем һәм артабан бирелгән юғары энергияны күтәрергә, уға сыҙарға кәрәк. Бының өсөн аура таҙа булырға тейеш - был төп критерий. Сөнки беҙҙең ағзаларыбыҙ һәм күҙәнәктәребеҙ ауранан алған энергия менән туҡлана.

Үкенескә күрә, күптәрҙең аураһы бысраҡ һәм һәм бөгөнгө энергия артыуын да күтәрә алмай. Был хәлһеҙлек, һүлпәнлек, хроник арығанлыҡ, баш ауыртыуы, баш әйләнеүе, тын ҡыҫылыу, ҡурҡыу һәм хәүеф хисе тыуыуы аша сағыла. Бынан йөрәккә, тамырҙарға, нервылар системаһына көсөргәнеш килә. Һөҙөмтәлә, йәшенә ҡарамай, күпләп инфарктан, инсульттан үлеүселәр арта. Бынға юл ҡуймаҫ өсөн ни бары auраны таҙартырға ғына кәрәк.

Аураны таҙартыуҙың альтернативаһы юҡ (дарыу ашауҙан аура таҙармай һәм сәләмәтлек тергеҙелмәй). Быны белергә һәм аңларға кәрәк. Бында ҡасандыр ниндәйҙер ағзаң ауырығанын көтөп йөрөргә ярамай, ауранı алдан таҙартыу зарур. Бик йыш яман шештәр, таштар, киста, миома бимазаламай, ә тыныс ҡына үҫә. Онкологияны ла һуңғы - өсөнсө стадияға еткәс кенә беләләр. Күптәр эсәктәрендә бер нисә килограмм таш һәм бабаҫыр йөрөтә, ә шул уҡ ваҡытта бер нәмә лә борсомай. Бик йыш кеше үҙен насар тоя, ә артыҡ иғтибар бирмәй. Был организмда ниндәйҙер ағза ауырыуын, тиҙ генә уның сәбәптәрен табып, ауыр эҙемтәләргә еткермәй, бөтөрөргә кәрәклеген иҫкәртә. Йәшебеҙгә ҡарамай, беҙ сәләмәт булырға тейешбеҙ.

Һәр йән эйәһе үҙенең тирбәлеү (вибрация) йышлығына эйә. Вирустарҙа ул 10 герц, ә бабаҫырҙарҙа бер нисә тиҫтә герц. Үкенескә күрә, күпселек кешеләрҙә лә тирбәлеү йышлығы шул кимәлдә генә. Тимәк, күптәр йоғошло ауырыуҙарға бирешә һәм төрлө паразиттар менән зыянланған

Әммә вибрацияһы юғары булған кешеләр бер ниндәй йоғошло ауырыуҙарға бирешмәй. Ни өсөн? Сөнки вирустар өсөн был мөхит йәшәрлек түгел, улар өсөн был йыш тулҡынлы мейес кеүек. Бындай шарттарҙа улар юҡҡа сыға.

Иҫләһәгеҙ, урта быуаттарҙа тағун (чума), ваба (холера), сәсәк (оспа) һәм башҡа ауырыуҙар ҡоторған. Күптәр ҡырылған. Шул уҡ ваҡытта уларҙы кемдер тәрбиәләгән, дауалаған, әммә үҙҙәре ауырымаған. Ниңә? Яуап ябай - вибрациялары юғары булған.

Беҙҙең организм бик аҡыллы. Әгәр кеше өшөй икән, ул, вирустарҙы үлтереү өсөн, вибрацияны арттыра башлай - теш тешкә теймәй ҡалтырата. Беҙҙең тән температураһы 36,6 градус, был - күпселек микробтарҙың, вирустарҙың, бәшмәктәрҙең үрсеүенә юл ҡуймаған кәртә. Әммә тән температураһы төшһә, кеше өшөй башлаһа, уларҙың үрсеүенә кәрәкле юл асыла. Шуға күрә организм һаҡланыу механизмын эшкә ҡуша - үҙ вибрацияһын арттыра башлай.

Вирустарҙы үлтереүҙең икенсе механизмы - температураны күтәреү. Ҡайһы ваҡыт организмға температураны 38 градусҡа тиклем күтәреү ҙә етә. Кәрәк икән, уны 40 градусҡаса күтәрергә лә мөмкин. Биҙгәк - организмдың температураны һәм вибрацияны күтәреүе, унан һуң кешеләр шул уҡ вабанан йәки тағундан, әгәр температураларын төшөрмәһәләр, имен һауыға.

Хәҙер тирбәлеште күтәреүҙең ябай ысулын ҡулланалар: кешене күпмелер ваҡытҡа 100 градустан да түбән булған һыуыткыс камераға бикләйҙәр. Һөҙөмтәлә ул юғары вибрация менән ҡалтырай башлай һәм вирустар үлә. Һыуытҡыстан сыға - бер ниндәй вирус та юҡ, һап-һау. Хәҙер ни өсөн юғары вибрация кәрәклеге аңлашыламы?

Заманында Гиппократ, кеше организмы, әгәр табип үҙенең тупаҫлығы менән был процесҡа ҡыҫылмай икән, теләһә ниндәй ауырыуҙан да һауыға ала, тигән.

Теләһә ниндәй киҙеү, ваҡыты үткәс, туҡтай - был һәр кемгә билдәле. Ни өсөн? Сөнки тирә-яҡта ауырыша башлаһалар, башҡаларҙың организмы был турала хәбәрҙар була - энергия мәғлүмәте алышыу бара, һәм организм ағыуға ҡаршы матдә эшләп сығара.

Бына ни өсөн СССР-ҙа киҙеүгә ҡаршы вакцина эшләмәнеләр. Хәйер, уны эшләп сығарғансы, заказ биргәнсе, күпләп сығара башлағансы, ҡулланыусыға алып килеп еткергәнсе, вакциналау үткәргәнсе вирус штаммы үҙгәрә - мутация башлана. Ул инде бөтөнләй икенсе төрлөгә әйләнә.

Шулай итеп, вибрация ни тиклем юғары - кеше шул тиклем сәләмәт! Ә вибрацияны арттырыу сығанағы - мөхәббәт! Ни тиклем мөхәббәткә сорналғанһығыҙ, мөхәббәт сығағаны булып тораһығыҙ - шул тиклем сәләмәтһегеҙ. Был - сәләмәтлек һәм оҙон ғүмерлелек серҙәренең береһе!

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Үҙ-үҙеңә ышаныс һәм уның һөйөү тартып килтереүе

Ғәҙәттә, кешеләр тирә-яҡтағыларҙан илһам сығанағы эҙләй. Яҙыусыларға икенсе яҙыусылар тураһында белеүе ҡыҙыҡлы, рәссамдарҙы икенсе рәссамдарҙың ҡайҙан илһам алыуы ҡыҙыҡһындыра. Эшлекле кеше икенсе эшҡыуарҙарҙың серенә һәм алымына төшөнгөһө килә. Ғөмүмән, кешегә башҡаларҙың нимә менән нисек йәшәүе ҡыҙыҡ. Ул алған мәғлүмәт уға ла башҡалар өлгәшкән уңышҡа барырға ярҙам итер, тип хыяллана. Шуға ла иң ылыҡтырғыс үҙенсәлек булып уңыш тора.

Һеҙҙең эшһеҙ кешегә иғтибарығыҙ тыуырмы? Әрпеш кейемлегә? Балаһы төрмәлә ултырған кешегә? Беҙ уларҙы уңышһыҙ кешеләр тип уйлайбыҙ. Улар менән аралашыу беҙгә ниндәй файҙа килтерергә мөмкин? Һәм беҙ уларҙы урап үтәбеҙ. Үҙ-үҙенә ышанған кешегә, киреһенсә, иғтибар йүнәлтәбеҙ.

Үҙегеҙҙе икенсе кеше урынына ҡуйып ҡарағыҙ. Уның иғтибарын йәлеп итер өсөн һеҙ үҙ-үҙегеҙгә ышанырға тейешһегеҙ. Әммә, әгәр һеҙҙең етешһеҙлектәрегеҙ күп һәм ҡаҙаныштарығыҙ аҙ икән, нисек ышаныс сағылдырырға? Яуап бер: үҙ-үҙеңде ҡайтанан программалаштырырға.

Һеҙгә ышаныс тойорға нимә ҡамасаулай? Моғайын, һеҙ үҙегеҙҙе буй етмәҫлек идеал менән сағыштыраһығыҙҙыр? Башҡа кеше менән яҡынайыу һеҙҙә ҡурҡыу тойғоһо тыуҙырамы? Бәлки, ҡасандыр һеҙ көслө яратыу кисереп, ауыҙығыҙ бешкәндер? Һәр саҡ үҙ-үҙегеҙҙе тәнҡитләйһегеҙ? Бәлки, ата-әсәләр менән мөнәсәбәтегеҙ һеҙҙе мөхәббәткә лайыҡ түгел тигән һығымтаға килтергәндер?

Бындай кисерештәрҙең сәбәбен яратылырға лайыҡ түгелмен тигән уй менән сағыштырырға ярамай. Беҙ һеҙгә элеккеләрен юйып, бығаса булмаған тойғоларға килтереүсе, ышаныс тыуҙырыусы яңы программа тәҡдим итәбеҙ. Әгәр кире тойғоларығыҙҙың сәбәбен асыҡлаһағыҙ, уларҙы түбәндәге күнекмәнең икенсе пунктына урынлаштырығыҙ. Күрһәтмәне бер нисә тапҡыр яҡшы итеп уҡығыҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Нисек итеп үҙеңдә ышаныс тәрбиәләргә?**

• Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп тын алығыҙ һәм ятҡан тыныс картинаны күҙаллағыҙ.

• Әгәр үҙ-үҙегеҙгә ышанысығыҙҙы аныҡ кешеләр йәки ваҡиғалар боҙа икән, уларҙы ентекле итеп күҙ алдына баҫтырығыҙ. Барыһы ла хәҙер бара икән тип уйлағыҙ. Һуңынан ошо күренеште ҡыҙыл хәрефтәр менән яҙылған "Юҡ" тигән һүҙ менән ҡаплағыҙ.

• Үҙегеҙҙе һеҙҙең менән һоҡланған, һеҙҙең иғтибарығыҙға лайыҡ булырға тырышҡан табыныусылар араһында икән тип күҙ алдына килтерегеҙ.

